*Хөрмәтле уҡыусыбыҙ! Бына беҙ тағы ла бергәбеҙ. Артабан да зауыҡығыҙға, күңел талабығыҙға тап килгән йөкмәтке менән ҡыуандырырбыҙ һеҙҙе, тип ышандырабыҙ. Ә эргә-тирәгеҙҙә теге йәки был сәбәптәр менән гәзитебеҙгә яҙылмай ҡалғандар булһа, ошо хәбәрҙе еткерегеҙ уларға: 16 ғинуарға тиклем яҙылһалар, гәзит уларға февралдән килә башлар. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы иреклe | №1 (367)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Юлаевсылар...**

шатлыҡ өләште



5

**Ялған йондоҙҙарға эйәреү...**

яман көс яғына ауышыу ул



7

**Халҡым йәшәгәндә ер йөҙөндә,**

минең шағирлыҡ ул - сәйәсәт...



8-9

**Хәүефһеҙлек...**

Иң мөһим талап шул



15

14 ТВ программа

# *Барыҫ йылы менән!*

*Теҙелешеп килә йылдар,*
*Сыҡҡандармы ярышҡа?*
*Яңы йылым тәҙрә сиртә*
*Атланған да Барысҡа.*

*Ғәйрәттәре күсһен беҙгә -*
*Йүгәнләгән Барыҫты.*
*Барыҫы ла белһен, әйҙә,*
*Сасҡауҙарҙы, ҡар, ҡышты.*

*Барыҫ йылы - ҡырыҫ, тиҙәр,*
*Ҡырыҫ микән? Бар, өндәш!*
*Барыҫ йылы барын сәс һин,*
*Һис булмаһа, тарың сәс.*

*Тәғәм ризыҡ ҡалмағанда,*
*Тәмләтер ул тарыһын:*
*Тары тартҡан Барыҫ йылың*
*Ырыҫыңа тартһын.*



*Барыҫ йылы - ҡырыҫ, тиҙәр,*
*Үтһә, ул да йәл кеүек.*
*Ҡырыҫлыҡмы бәлә яһай,*
*Әллә күберәк һәлкәүлек?*

*Барыҫ йылы - ҡырыҫ, тиҙәр,*
*Ҡарамайыҡ ырымға;*
*Бәхет юлын кире бормаҫ,*
*Ҡарап көрткә, йырынға.*

*Ҡырыҫ булһа, булыр Барыҫ,*
*Бер һикерер яҙ, йәйгә;*
*Бәндәләргә ярар өсөн*
*Әйләнмәҫ тә... бесәйгә!*

*Сафуан ӘЛИБАЕВ.*

НИҺАЙӘТ!

# "ЭЛЕКТРОН" ХӨКҮМӘТ ЯРҘАМҒА КИЛӘ

Ниндәйҙер белешмә, танытма йәиһә башҡа бер кәрәкле документ-мағарға ихтыяж тыуа ҡалһа, һәр беребеҙ теге йәки был контораға, учреждениеға, муниципаль йәки дәүләт хеҙмәте органдарына мөрәжәғәт итергә мәжбүр. Ябай ғына тойолған ҡағыҙ киҫәгенә эйә булыу өсөн күргән ыҙалар кемебеҙҙе лә тетрәндереп ебәрерлек: һәр төрлө чиновниктар, бюрократтар йомошо төшкән кешене үҙҙәрен бимазалаған себен урынына күреп, унан тиҙ генә ҡотолоу әмәлен ҡарай, беренсеһе - икенсеһенә, икенсеһе өсөнсөһөнә оҙата...

Ниһайәт, дәүләт хеҙмәтләндереүе өлкәһендә теңкәбеҙгә тейеп бөткән бюрократизмға сик ҡуйырҙай ҡарарҙар ҡабул ителә башланы. РФ Президенты Дмитрий Медведев Дәүләт советы һәм Мәғлүмәти йәмғиәт үҫеше советының берлектәге ултырышында 2015 йылға тиклем бөтә дәүләт хеҙмәтләндереүен электрон формаға күсереүҙе талап итте. Баҡтиһән, чиновниктарҙан торған хөкүмәттән башҡа "электрон хөкүмәт"тең дә булыуы мөмкин икән. Бына ошо технологик идара итеү органы булдырылһа, илебеҙ граждандары электрон хеҙмәтләндереү мөмкинлеген аласаҡ. Бөтә дәүләти һәм муниципаль органдар, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, торлаҡ-коммуналь хужалығы учреждениелары, йәғни граждандарҙы хеҙмәтләндереүсе бөтә ойошмалар һәр мохтаж кешенең ихтыяжын заманса электрон бәйләнеш аша ҡәнәғәтләндерә алырға тейеш.

Бына ошо ғәжәп шәп реформа ғәмәлгә ашырылһа, чиновниктарҙың ҡабул итеүен көтөп ултырыуҙан, йәиһә төрлө учреждение коридорҙарында бөткөһөҙ сиратта тороуҙан ҡотоласаҡбыҙ. Былдай эш башланды ла инде: интернеттағы gosuslugi. ru порталына инһәң, бөгөн үк бөтә Рәсәй кимәлендәге дәүләт хеҙмәтләндереүе буйынса тейешле мәғлүмәткә эйә буласаҡһың. Киләсәктә компьютер клавишаһы төймәләренә баҫып ҡына ла белешмә-фәлән алыу, төрлө түләүҙәрҙе башҡарыу мөмкин буласаҡ. Әйткәндәй, Башҡортостанда ла был мөһим эшкә иғтибар арта бара: бөгөн, мәҫәлән, табиптарға ҡаралырға барам, тиһәң, интернет аша ғына яҙылып була. Тормоштан артта ҡалмайыҡ, тиһәк, барыбыҙға ла интернет менән хәҙерҙән үк дуҫлашыу фарыз, ағай-эне.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**"Беҙ 2015 йылға тиклем Рәсәй Федерацияһында мәғлүмәти йәмғиәт үҫеше стратегияһына ярашлы бөтә дәүләт хеҙмәтләндереүен электрон формаға күсерергә тейешбеҙ. Һыҙыҡ өҫтөнә алам - өлөшләтә түгел, ә бөтәһен дә".**

**Дмитрий МЕДВЕДЕВ,**
**Рәсәй Федерацияһы Президенты.**

БЫЛ АЙҘА

# ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ ЙЫЛ БАШЫ

**Һижри иҫәп буйынса Яңы 1431 йыл Миләди иҫәп буйынса 2009 йылдың 17 декабрендә үк башлана. Тимәк, мосолман донъяһы башҡаларға ҡарағанда Яңы йылға 14 көн иртәрәк аяҡ баҫты быйыл. Ә 2010 йылда иһә Яңы 1432 йыл Миләди буйынса 7 декабрҙә үк башланасаҡ.**

Йылдың тәүге көнө 1 ғинуарҙың (Мөхәррәм айының 16-сы көнө) Эске Рәсәй мосолмандарының рәсми рәүештә Ислам динен ҡабул итеү көнө (922 Миләди йыл - 310 Һижри йыл) булып иҫәпләнеүе был йылдың ғына түгел, быуаттың һәм мең йыллыҡтың оло ваҡиғаһы булырлыҡ. Ни өсөн тигәндә, йыл оҙонлоғо Һижри буйынса ҡыҫҡараҡ һәм айҙар һәм көндәр урындары йыл һайын күсә бара. Тимәк, ошо йылдың 1 ғинуары яңынан 36 йылдан һуң ғына Мөхәррәм айының 16-сы көнөнә тап килмәнә лә, яҡынлаша. Ә быйыл иһә тап-таман тура килә. Логик яҡтан ҡарағанда, йылдың тәүге көнөнөң Рәсәй мосолмандарының рәсми рәүештә Ислам динен ҡабул итеү көнөнә тап килеүе 2010 йылдың башҡа йылдың быуаттағы һәм мең йыллыҡтағы башҡа йылдар араһындағы айырым статусын билдәләй кеүек.

Шуғалырмы, тулғаклы 2009 йылдан һуң Яңы йылдың тәүге айы - ғинуарҙа донъяға тыуыусылар араһында донъяның һәм милләтебеҙҙең фиҙакәр кешеләре күптер. Быйыл түңәрәк даталары тулғандарын ғына һанап китеү ҙә бик күп ваҡытты алыр ине. Уларҙың бер нисәүһен генә атап китәйек. Был айҙа бөйөк башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың тыуыуына -115, атаҡлы ҡурайсы, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Кәрим Дияров менән композитор, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәүеф Мортазинға - 100, Башҡортостандың халыҡ артисы, композитор Бәхти Ғайсиндың тыуыуына - 80, философия фәндәре докторы, профессор Дамир Вәлиев менән талантлы йырсы Илфаҡ Смаковтың тыуыуына - 70, шағир Ринат Хәйризән тыуыуына 60 йыл тула, Быйылғы юбилярҙар: Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов - 80, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова, шағирә, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Факиһа Туғыҙбаева, тарих фәндәре докторы, профессор Роза Буканова - 60-шар, яҙыусы Мөнир Ишбулатов - 75, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Эльвира Юнысова менән яҙыусы, РФ почетлы мәғариф хеҙмәткәре Салауат Кәрим 50-шәр йәшлек юбилейҙарын билдәләйәсәк.

Ғинуарҙа шулай уҡ Раштыуа байрамы, ҡурсаулыҡтар, РФ прокуратура хеҙмәткәрҙәре, Рәсәй матбуғаты, РФ инженер ғәскәрҙәре, Рәсәй студенттары, Бөтә донъя таможня көндәре үтәсәк.

**Әхмәр ҮТӘБАЙға ла ошо айҙың 29-да 50 йәш туласаҡ.**

ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ ИШАРАҺЫ

**Йылдың һуңғы айы декабрь көтөлмәгән сюрпризлар алып килде. Улар иң тәүҙә һауа торошона ҡағылды. Көндәр, бигерәк тә төндәр бик һыуыҡ торҙо. Йылға буйҙарындағы ауылдарҙа температура 45 градусҡа тиклем төштө. Тәбиғәттәге бер күренеш тә осраҡлы булмай. Һәр хәлдә, Башҡортостан Республикаһында Йәштәр башланғыстарын хуплау һәм үҫтереү йылына һуңғы ай шулайыраҡ йомғаҡ яһаны. Йәштәрҙеке - йәштәрсә, тигәнгә лә ишара бар һымаҡ бында.**

# ТӘБИҒӘТ ТИГЕҘЛӘНЕ...

### Йүгәнһеҙлеккә йүгәнһеҙ ҙә...

Кешенең йәшлек мәлен юҡҡа ғына "йүгәнһеҙ тай осоро" тип атамайҙарҙыр ул. "Йүгәнһеҙ тай осоро"ноң заманға ярашлы терминын да уйлап сығарҙылар. Бер һүҙ менән ул "прагматизм" тип аталалыр. Һәр хәлдә, терминдың тәржемәһе бермә-бер тап килмәнә лә, мәғәнәүи оҡшашлыҡ бар бында. Ә прагматизм бик боронғо дәүерҙәрҙән башлап һәр быуын йәштәренә хас булған. Йәғни, йәштәр һәр ваҡытта ла, ололарҙың йәшәү принциптары менән риза булмайынса, бер шағир әйткәнсә, "үҙенсә атламаҡ" булып, бигерәк тә замандың һынылышлы мәлдәрендә халыҡты үҙ артынан эйәртеп, һәләкәттән алып сыға алған. Прагматизм ғөрөфгәҙәттәрҙе, йола-традицияларҙы, халыҡтың әхлаҡи принциптарын үҙ итә һалып бармай, һәр ваҡыт ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшеүҙе байраҡ итеп күтәрә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, беҙҙең хәҙерге йәштәребеҙгә лә хас ындай сифаттар, сөнки капитал туплауҙың "бүре принцибы" күп кенә әхлаҡ нормаларын һанға һуғып бармай. Ә инде әхлаҡ нормалары һанға һуғылған саҡта капитал тупланмай.

Әммә нисек кенә булмаһын, тормош дауам итә һәм уның үҙ ҡанундары бар, һәм ул ҡанундар йәштәргә лә, ололарға ла берҙәй үк ҡағыла. Улай ғына ла түгел, кеше иртәме-һуңмы, тормоштоң ҡотолғоһоҙ хәҡиҡәте алдына бер килеп баҫа барыбер. Ғүмеренең аҙағында ғына булһа ла. Бик-бик һуңлап булһа ла. Кем белә, бәлки, шуның өсөндәр ҙә Хоҙайыбыҙ йәштәр үҙҙәренең "прагматик хатаһын" үҙ мәлендә аңлап өлгөрһөн һәм бынан ҡотолоуға юл алһын өсөн йыл аҙағында ошондай һыуыҡтарҙы ебәрәләр?

Нимә генә тимә... Баш ҡала урамдарына селлә һыуыҡы ишелеп төшкән көндәрҙә быға тик машинала ғына эшкә барырға күнеккәндәр, бигерәк тә йәштәр, машиналарын ҡабыҙа алмайынса, эшкә йәмәғәтселек транспортында йөрөнө. Тәбиғәт барыбыҙҙы ла тигеҙләне. Йәштәрҙе лә, ҡарттарҙы ла, байҙарҙы ла, ярлыларҙы ла...

### Барыбер ҙә шәптәр улар...

Берсә етешһеҙлек эҙләйбеҙ уларҙан, берсә маҡтайбыҙ. Етешһеҙлек эҙләү, тәнҡитләп маташыу... улар һымаҡ йәш була алмауыбыҙҙы аңлап әсенеүҙән тыуған бер ғәләмәт кенәлер ул. Барыбер ҙә йәшлек - йәшлек инде ул.

Бына беҙ, йәғни "Киске Өфө"нөң өлкән быуын вәкилдәре, үтеп барған Йәштәр башланғыстарын хуплау һәм үҫтереү йылының һуңғы көндәрендә редакциябыҙҙың ҙур өлөшөн тәшкил иткән йәштәребеҙ инициативаһы буйынса, уларҙың башланғысын яҡлап, ҡышҡы тәбиғәт ҡосағына, бер ял итеү базаһына барҙыҡ. Йәштәр ынғайына уйнаныҡ-көлдөк, "Аҡ тирәк - күк тирәк", "Һәпәләк" һәм башҡа бик уйындарҙа ҡатнаштыҡ, тюбингтарға ултырып, һырғалаҡ шыуҙыҡ, әсәе мунсанан сығып, тыштағы һалҡын бассейнға сумдыҡ. Вәлиәхмәт Бәҙретдиновыбыҙ хатта бассейн тирәләй ҡар өҫтөндә ялансаяҡ "Байыҡ"ты бейеп алды.

Күңелебеҙ булып, йыл буйына тәнгә һәм йәнгә йыйылған ауырлыҡтан бушанып, баш ҡалабыҙға ҡайттыҡ һәм... Йәштәр башланғыстарын хуплау һәм үҫтереү йылының редакциябыҙҙағы был ваҡиғаһына шундай һығымталар яһаныҡ:

- баҡтиһәң, беҙ ял итә белмәйбеҙ, ял итеүҙе ҡала фатирында диванда ятып, телевизор ҡарау, тип кенә аңлап, төптә яңылышабыҙ икән;
- баҡтиһәң, беҙ тәбиғәт балалары һәм тәбиғәттән алыҫлашып өлгөрмәгәнбеҙ икән;
- баҡтиһәң, бер ниндәй эскеһеҙ ҙә ваҡытты күңелле итеп үткәрергә, һәр һөйләгән һүҙҙе уйынға, юморға бороға була һәм хәҙерге йәштәребеҙҙең күпмелер өлөшөнөң тап ошондай ялды үҙ итеүе юҡҡа түгел икән;
- беҙ үҙ йәштәребеҙгә эйәреп, быға тиклем үҙебеҙҙең күп нәмәнән ҡоро ҡалғанды аңланыҡ, баҡтиһәң, "Ат аҙғыны тайға эйәрер", тигән мәҡәл бигүк дөрөҫлөккә тап килмәй икән;
- баҡтиһәң, беҙ йәштәребеҙҙе прагматизмда, заман мишураһына бирелгәнлектә үтә ғәйепләйбеҙ, улар ҙа беҙҙең бала, үсмер саҡтағы "Аҡ тирәк - күк тирәк", "Һәпәләк" кеүек уйындарҙы уйнай икән;
- тәбиғәт ҡосағында ял иткәндә редакциябыҙ хеҙмәткәрҙәре араһында йәш айырмаһын һис тойманыҡ, баҡтиһәң... тәбиғәт барыбыҙға ла тигеҙ ҡарай икән.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**



Тәбиғәт ҡосағы - беҙҙең икенсе йортобоҙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты исеменә М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты ректоры В.А. Садовничийҙан хат килде. Ул юғары белемгә булышлыҡ иткәне һәм Башҡорт дәүләт университетының 100 йыллығына арналған сараларҙы үткәреүҙә ярҙам күрһәткәне өсөн Президентыбыҙға рәхмәт белдерә.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Яңы йыл алды көндәрендә эш сәфәре менән республиканың төньяҡ-көнсығыш районларында булды. Президент Балаҡатай районы Яңыбай ауылында мәктәп һәм балалар баҡсаһы, Ямаш ауылында яңы мәҙәниәт йортон асыу тантаналарында ҡатнашты, шулай уҡ быйыл файҙаланыуға тапшырыу планлаштырылған объекттарҙы төҙөү һәм реконструкциялау буйынса эштәр барышы менән танышты.

✓Ошо көндәрҙә Ҡаҙан ҡалаһында татар һәм башҡорт театрҙарының ижади эшмәкәрлеген нығытыу буйынса әүҙем эшмәкәрлеге өсөн М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының баш режиссеры Айрат Абушахмановка татар актеры һәм режиссеры Дамир Сиражиев исемендәге премия бирелде. Был юғары премияға төрлө йылдарҙа Рәсәй киммәлендә киң билдәле режиссерҙар, актерҙар, драматургтар һәм театр тәнҡитселәре лайыҡ булған.

✓Шәйхзада Бабич исемендәге Республика йәштәр дәүләт премияһы буйынса комиссия 2009 йылдың аҙаҙбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә ижад ителгән әҫәрҙәрҙе һәм эштәрҙе ҡабул итә башлауы тураһында белдерә. Хөкүмәт ҡарары буйынса, йыл да 50-шәр мең һумлыҡ өс премия биреү ҡаралған.

✓Өфө ҡала Советы депутаттары баш ҡаланың Ленин һәм Киров райондарындағы Нехаев, Красин, Аксаков, Зәки Вәлиди, Алтайский урамдары һәм Ағиҙел йылғаһы менән сикләнгән биләмәһе планын проектлау буйынса асыҡ тыңлауҙар үткәрергә ҡарар итте. Был биләмә 259 га майҙанды тәшкил итә һәм бында 27,6 мең кеше йәшәй. План проекты буйынса тәҡдимдәрен өфөләләр бер ай эсендә ебәрә ала. Ә асыҡ тыңлауҙар 27 февралдә хакимиәттең архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығы бинаһында үтәсәк.

ЙЫЛ ШАҢДАУЫ

# ҮТКӘН ЙЫЛДЫ НИСЕК АТАРҒА -

## көрсөк килеп ҡурҡытҡан йыл, типме ни?

**Тағы ла бер йыл тамам. Төптәнерәк уйлаһаң, бер йыл менән генә хушлашмайбыҙ икән 2009 йылды оҙатҡанда. Тотош бер тиҫтә йыл артта ҡалған да баһа. Егерме беренсе быуаттың тәүге ун йылы тарихҡа инеп бара. Нисек үтте улар? Уңдыҡмы? Әллә туңдыҡмы? Егерменсе быуат менән тейешенсә хушлаштыҡмы? Әллә уҙған быуатта эшләгән хаталарыбыҙҙы, тамамланмаған эштәребеҙҙе үҙебеҙ менән киләсәккә алып китеп барабыҙмы? Үткән быуаттағы "ябылмаған ишектәр, һүндерелмәгән үтектәр" төшкә инеп аптыратмаймы?**

### Барлайыҡ әле..

Хәйер, был юлы үткән йыл хаҡында ғына. 2000-2009 йылдар, ошо арауыҡ эсендә булып үткән иң мөһим ваҡиғалар, ҡайғылар һәм шатлыҡтар, билдәһеҙлектән сығып дандың иң юғары нөктәһенә күтәрелгән һәм, киреһенсә, билдәһеҙлек упҡынына осҡан шәхестәр, ғөмүмән, ошо осорҙағы тормошобоҙ тураһында ентекләберәк "Киске Өфө"нөң киләһе һандарының береһендә уҡырбыҙ, тип өмөтләнәйек.

Рәсәй өсөн үткән йыл нимә менән иҫтәлекле булды һуң? Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. Көрсөк менән, тиер берәүҙәр. Дөрөҫ. Нисек ҡурҡытҡайнылар беҙҙе ул ғәләмәт менән! Предприятиелар ябыласаҡ, эшселәрҙе урамға сығарып ташлаясаҡтар, хаҡтар артасаҡ. Халыҡ сараһыҙҙан забастовкалар ойошторасаҡ, митингыларға һәм пикеттарға сығасаҡ, тип лаф орғайнылар. Эйе, митингылары ла булды, эшһеҙҙәр һаны ла илдә күбәйҙе. Әммә сит ил дөйөм мәғлүмәт саралары һәм үҙебеҙҙең ҡайһы бер "күрәҙә"ләр фаразлағанса килеп сыҡманы - кешеләр был йылды сағыштырмаса тыныс ҡына үткәрҙе. Эйе, Пикалево халҡы (Ленинград өлкәһе) федераль трассаны ҡаплап, Владимир Владимирович Путинды үҙ янына килергә мәжбүр итте итеүен. Әммә бөтә дәүләтте дер һелкеткән халыҡ күтәрелештәренән Алла һаҡланы. Тимәк, тип һығымта яһап ҡуйайыҡ, көрсөк шарттарында ла йәшәргә өйрәнеп барабыҙ. Капитализмға ла күнегәбеҙ, йәғни.

Шулай ҙа 2009 йылда илебеҙҙә көслө шаңдау булып яңғыраған ваҡиға - ул көрсөк түгел. Ваҡытлы матбуғат саралары биттәрендә, телеэкранда һәм радиоэфирҙа телгә алыныу йәһәтенән Путин менән Медведевтан ҡала килгән исем - ул... Кем тип уйлайһығыҙ инде? Дөрөҫ, йәмәғәт, Евсюков. Ябай майор. Эске эштәр бүлеге начальнигы. Тәүге ике фамилияның көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатланыуы бер ҙә ғәжәп түгел. Улар даими рәүештә махсус телеэфирҙар, "тура бәйләнештәр", "халыҡ менән осрашыуҙар" үткәрә. Ай һайын тиерлек уларҙың рейтингыларын иҫәпләп сығарып ҡына торалар. Ә Евсюковҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Уның рейтингы былай ҙа юғары.

### Рәсәйҙә Евсюков йылы, йәки милициянан беҙҙе кем һаҡлар?

Үткән йылды кем нисек, ә мин Евсюков, йәки эске эштәр органдары менән бәйле шау-шыу йылы тип атар инем. Евсюков һәм башҡа уның кеүегерәк ҡорал сығарып, уңлы-һуллы ата башлаған, ғәйепһеҙ граждандарҙы туҡмап үлтергән милиционерҙар хаҡында бер түгел, бер нисә тапҡыр яҙылғайны инде. Ҡабатланмайыҡ. Мәғәнәһе юҡ. Был мәсьәләгә, йәғни эске эштәр хеҙмәткәрҙәренең урынлы-урынһыҙ ҡорал сығарыуҙары, атыша башлауҙары, һуғышыуҙарына нимә сәбәпсе булып тора һуң? Ошо турала уйлашайыҡ әле. Бәлки, был беҙҙең милициябыҙ өсөн осраҡлы күренештер? Бәлки, органдарҙа күпселек тәртипле, уйлы кешеләр эшләйҙер? Ысынлап та шулай бит, йәмәғәт. Моғайын, һеҙҙең таныштарығыҙ, дуҫтарығыҙ, туған-тыумасаларығыҙ araһында эске эштәр органдарында хеҙмәт иткәндәр барҙыр бит? Ҡарағыҙ әле уларҙың йөҙҙәренә. Унда бит "енәйәтсе", йәки "үлтереүсе" тип яҙылмаған. Улар бит башҡалар кеүек үк ябай, нормаль кешеләр. Һорағыҙ әле уларҙан - эштә һуғышалар микән? Енәйәттә ғәйепләнеүселәрҙе йоҙороҡтары менән төйәләр микән? Ҡулдарына пистолет алһалар, урамға сығып, уңлы-һуллы атҡылары килмәй микән? Ишеткәнһегеҙҙер - әле Евсюковты хөкөм итәләр. Суд барышында унан "Кешеләрҙе атып үлтергәнегеҙҙе аңлағас, үҙ-үҙегеҙҙе үлтереү теләге тыуманымы?" - тип һорағандар икән. Беләһегеҙме, ул нисек итеп яуап ҡайтарған? "Мин алйот түгел дә баһа", - тип! Йәғни, ул үҙен йүләр һанамай. Ул, тимәк, аҡыллы. Кешеләргә лә белә тороп атҡан. Евсюков үҙенә бирелгән срокты (ә, белеүегеҙсә, беҙҙең илдә үлем яҙаһы юҡ) ултырып сығасаҡ һәм уның ҡулынан һәләк булыусыларҙың туғандары унан үс алмаһа, артабан да тыныс ҡына йәшәүен дауам итәсәк. Китап яҙып та сығарыр әле.

Нимә боҙа һуң уларҙы? Ни өсөн милиционерҙар үҙҙәрен ябай халыҡты яҡлаусы, уның мөлкәтен һаҡлаусы тип түгел, ә башҡа кешеләрҙән өҫтөн торған бер... (кем тип әйтәйем икән?) зат тип ҡабул итә? Бит Евсюковтың магазин буйлап йөрөп атышыуы үҙен Алла кеүек тотоуы менән бер ҙә баһа. Теләһәм - үлтерәм, теләмәһәм - юҡ, тигән мәғәнә ята бит уның был ҡылығында. Уйһыҙ башта "мин власҡа эйә", тигән фекер тыуыуы, йәғни милицияның төп маҡсатын яңылыш аңлау боҙа уларҙы. Улар бөгөн һәр беребеҙҙә ғәйепләне күрә. Ә бит улар яҡлауға мохтаж кешене күрергә тейеш.

Хәйер, милиция хаҡында бөгөнгә тамам. Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев Яңы йыл алдынан ғына эске эштәр органдарын яңыртыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Тимәк, 2010 йылда беҙ милициябыҙҙың үҙгәреү процесына шаһит буласаҡбыҙ.

Һүҙебеҙ Рәсәй милицияһы хаҡында түгел, ә йыл һөҙөмтәләре тураһында ине бит әле. Дауам итәйек. 2009 йылды тағы ла нисек атап булыр ине? Үткән 364 көн эсендә булған шаҡҡатырғыс һәм кеше хәтерендә оҙаҡ һаҡланырлыҡ ваҡиғаларға ҡарағанда уҙған осор Япончик йылы исеменә лайыҡ. Хәтерләнегеҙме?

### Япончик: енәйәтсеме, әллә... кем?

Октябрь айында Мәскәүҙә Япончикты (йәғни, Вячеслав Иваньков) тигән әҙәмде ерләнеләр. Ваҡытлы матбуғат саралары был... сараны үтә әүҙем яҡтыртты. Гүйә, яҡты донъя менән енәйәтсе түгел, ә кәмендә... (кем тип әйтһәм, башҡаларҙы кәмһетмәҫмен икән?) сәйәси эшмәкәр (хатта ил башлығы?) хушлашҡан. Көпә-көндөҙ Мәскәүҙең иң абруйлы зыяраттарының береһендә ("абруйлы" тип яҙҙым да уйға баттым, йәмәғәт. Теге донъяны ла абруйлы һәм абруйһыҙға бүлеп була микән?) илебеҙҙең иң яуыз енәйәтселәренең береһен ерләнеләр. Уның менән хушлашырға бөтә Рәсәйҙән уның ишеләр йыйылды. Бер кемдән дә ҡурҡмай һәм оялмай ғына үҙҙәренең "хужалары" менән хушлашты улар. Сәскәләр һалдылар. Ҡайғырҙылар. Һуңынан йыйылышып уның иҫтәлегенә бокалдар күтәргәндәрҙер әле.

Бына шундай дәүләттә йәшәйбеҙ беҙ, йәмәғәт. Милиционерҙарҙан ҡурҡырға кәрәк. Уларҙың ҡулдарында пистолет һәм власть. Ә енәйәтселәрҙән шикләнергә түгел. Улар бөгөн асыҡтан-асыҡ йөрөй, үҙ-ара осраша, лидерҙары менән хушлаша. Мәскәү зыяратында милиционерҙар ҙа булған, имеш. Беләһегеҙме ни өсөн? Тәртип булдырыр өсөн. Йәғни, ябай граждандарҙың был ваҡытта зыяратҡа килеп, бөтә Рәсәй криминалитетының башлығы менән хушлашҡанына ҡамасауламаһын өсөн. Бына ошондай аҫты өҫкә түңкәрелгән дәүләттә йәшәйбеҙ беҙ.

### Пенсия фонды, һаҡлыҡ банкы һәм Үҙәк банк йылы

Күптән түгел генә булды был хәл. Таныштарымдың береһе пенсияһы хаҡында ҡайғырта башланы. Дөрөҫ, пенсияға тиклем уға әле алыҫ. Кәмендә егерме йыл. Әммә ул бөгөндән пенсия тураһында уйлай. Ә бит дәүләт беҙгә, шул иҫәптән минең танышыма ла, иҫ китмәле уңайлы һәм матур шарттар тәҡдим итә. Пенсияңды арттырырға теләйһеңме - рәхим ит! Бөгөн Пенсия фондына аҡсаңды индер, иртәгә (һинең пенсия йәшең еткәс, әлбиттә) һин матур пенсия аласаҡһың. Хаҡлы ялда кешесә йәшәйәсәкһең. Пенсияң ҙур буласаҡ. Үҙеңә лә, ейәндәреңә лә етәсәк. Етәсәкме? Үткән йылдағы ҡайһы бер ваҡиғаларға ҡарағанда, Рәсәй пенсионерҙарының киләсәге өмөтһөҙ. Октябрь айында Рәсәй Пенсия фондынана 1 миллиард 250 миллион һум аҡса юҡҡа сыҡты. Ҡайҙа, тип уйлайһығыҙмы? Билдәһеҙлеккә! Әлбиттә, һуңынан аҡса табылды, тип иғлан иттеләр. Тик уларға ышанырға буламы?

Ғөмүмән, пенсия аҡсалары даими рәүештә юҡ була. Декабрь айында ғына Һаҡлыҡ банкының хеҙмәткәрҙәре пенсионерҙарҙың 16 миллион һум аҡсаһын урлап тотолдо. Улар вафат булған йәки бер нисә йыл буйына пенсияларын алмаған кешеләрҙең аҡсаларын сәлдергән. Улар тотолған. Ә тотолмағандары күпме?

Ғөмүмән, үҙ аҡсаларыңды дәүләткә ышанып тапшырырға буламы? Ай-һай! Беҙҙең дәүләтебеҙгә бер нәмәне лә ышанырға ярамай. Башҡаса мөмкин түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**2009 йыл артта ҡалды. Ул нисек үтте - бөгөн тулы баһа биреп булмай. Үткәндәргә ысын баһа бирер өсөн кәмендә 20-30 йыл үтергә тейеш. Көтәйек, йәмәғәт. Һәм... Яңы йыл менән!**

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Хеҙмәт баҙарындағы хәлде анализлау йәштәрҙең эшкә урынлашыуы менән бәйле проблемаларҙың да киҫкен тороуын күрһәтә. Иҫәптә тороусы һәр өсөнсө эшһеҙ - йәш белгес. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн республика Хөкүмәте, министрлыҡтар һәм ведомстволар, муниципаль район хакимиәттәре менән берлектә йәштәр араһында эшҡыуарлыҡты үҫтереү программаһы тормошҡа ашырыла. Бынан тыш, хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлекте кәметеү республика программаһы ла эшләй, был маҡсаттар өсөн 2009 йылда 575,5 миллион һум аҡса бүленгән.

✔"Бөтә Рәсәй маркаһы (III меңъйыллыҡ). XXI быуаттың сифат билдәһе" конкурсы йомғаҡтары буйынса республика предприятиелары Мәскәүҙән алтын, көмөш, бронза миҙалдар яулап ҡайтты. Еңеүселәр араһында "Башспирт", "Каустик", "Сода" предприятиелары, "Ишембай ойоҡ-ойоҡбаш фабрикаһы", "БР Нефть химияһын эшкәртеү институты" предприятиеһы бар.

✔8-10 ғинуарҙа Ҡаланы үҫтереү буйынса йәмәғәтселек фонды Ҡала мәҙәниәт һарайында Яңы йыл тамашаһы үткәрә. Унда "Ҡыш бабайға хат" конкурсына йомғаҡ яһаласаҡ. Байрамда ҡатнашыуға 3 мең бала саҡырыу аласаҡ. Уларҙың һәр береһенә бүләктәр тапшырыласаҡ. Әле байрамды ойоштороусылар балаларҙан килгән хаттар менән таныша. Быйыл уларҙың һаны 8 меңгә барып баҫҡан. Акцияны үткәреү өсөн аҡса йыйыуҙа барлығы 72 ойошма ҡатнашҡан.

✔Яңы йыл байрамдары көндәрендә әүҙем ял итеүселәрҙе матур һауа торошо көтә. Башгидромет синоптигы Анна Козаева әйтеүенсә, Мәскәүҙәге һәм Татарстандағы һымаҡ мул ҡар күммәйәсәк, беҙҙә ул һәүетемсә генә яуасаҡ. Көндөҙҙәрен 7-12, төнөн 10-15 градус һыуыҡ буласаҡ. Урыны менән 20 градус һалҡын булыуы, көслө ел сығыуы ихтимал.

✔Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы йылға йомғаҡ яһаны. Баш врач Ринат Нагаев билдәләүенсә, бында йыл һайын 24 мең кеше дауалана, 105 мең кеше тикшерелә һәм консультация ала, 20 мең ауырыуға операция яһала, санитар авиация менән 2200-ҙән ашыу тиҙ ярҙам күрһәтелә.

О, СПОРТ!

# БЕҘҘЕКЕЛӘР... мотоциклда ла, атта ла шәптәр

**Боҙҙа мотоуҙышыу буйынса Рәсәй шәхси чемпионатының финалына Башҡортостандан 6 спортсы сыҡты.**

Ике ярымфинал да Башҡортостан ярышсылары өсөн еңеү менән тамамланды. Әгәр ҙә Каменск-Уралда ғәмәлдәге Рәсәй һәм донъя чемпионы Николай Красников беренсе урында булһа, Өфөлә Стәрлетамаҡтың "Каустик" мотоклубынан Игорь Кононов еңеү яуланы. Өфө ярымфиналынан финалға бөтәһе 5 яҡташыбыҙ сыҡты.

***

**2010 йылдың 23-24 ғинуарында баш ҡаланың "Строитель" стадионында үтәсәк боҙҙа мотоуҙышыу буйынса Европа чемпионатына билеттар һатыла башланы.**

Уларҙы ҡаланың үҙәк кассаларында, www.ts1.ru һәм www.bashsport.ru сайттарында һатып алырға була. Стадиондың трибуналары 8000 тамашасыға иҫәпләнгән. Трибуналар һаны өсәү, әммә уларҙың ҙурлығы төрлөсә, шуға ла билеттар хаҡы ла айырыласаҡ. 5 йәшкә тиклемге балалар бушлай инә ала. Чемпионат ваҡытында стадионда туҡланыу урындары булдырыласаҡ һәм сувенир продукцияһы менән һатыу итеү ойоштороласаҡ.

***

**Шьюсьен ҡалаһында саңғы ярышы һәм биатлон буйынса Донъя кубогының беренсе этабы тамамланды.**

БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, унда 18 илдән 130-ға яҡын спортсы ҡатнашҡан. Рәсәй йыйылма командаһында Башҡортостан спортсылары - параолимпия ярыштары еңеүселәре Евгений Сафронов, Ирек Зарипов, Кирилл Михайлов һәм Ирек Маннанов сығыш яһаны. Рәсәй командаһы 31 миҙал яулап, беренсе урынға сыҡты. Евгений Сафронов 2 алтын, 1 көмөш, 1 бронза миҙал, Ирек Зарипов 2 алтын, 1 көмөш, Кирилл Михайлов 1 алтын һәм 1 көмөш миҙалға лайыҡ булды.

***

**Нефтекаманың "Торос"ы хоккей буйынса Рәсәй беренселегенең "Үҙәк" зонаһында беренсе этапты тамамланы.**

"Торос" Ырымбурҙа урындағы "Газпром-ОГУ" командаһын 4:2 менән еңде. Был юлы "Торос" составында Сергей Карпов, Евгений Туник, Владимир Жмаев һәм Анатолий Степанов яҡшы уйнаны. Нефтекама командаһы ике әйләнештән һуң Пермдең "Молот-Прикамье" командаһынан ғына ҡалышып, 77 мәрәй менән икенсе урында килә. Беренселектең икенсе этабында өсөнсө әйләнеш уйындары башланасаҡ, шыбаға буйынса, "Торос" 10-11 ғинуарҙа "Прогресс" менән осраша.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# РӘСӘЙҘӘ - УҠЫТЫУСЫ ЙЫЛЫ...



## Беҙҙең уҡытыусылар ҙа быға шат

**2010 йыл - Рәсәйҙә Уҡытыусы йылы буласаҡ. РФ Президенты Дмитрий Медведев ҡарары буйынса, ул уҡытыусыларҙың ижади һәм һөнәри һәләттәрен, был һөнәрҙең социаль әһәмиәтен үҫтереү маҡсатында үткәрелә. Яңы йыл алдынан БДПУ-ла тематик йылды асыу тантанаһы үтте лә инде. Унда республикабыҙҙа ошо йыл сиктәрендә үткәреләсәк саралар билдәләнде. Шуларҙың иң мөһиме - Башҡортостан уҡытыусылары съезы һәм "Йылы мәктәп" республика акцияһы үткәреү. Әйткәндәй, был акция сиктәрендә 100-ҙән ашыу мәктәпкә капиталь ремонт яһаласаҡ. Йыл дауамында төбәктә уҡытыусыларҙың эшмәкәрлеген күрһәтеүсе һөнәри оҫталыҡ конкурстары, күргәҙмәләр ойоштороласаҡ.**

Әбеҙҙең мәғариф системаһы бөгөн иң әүҙем эшләгән өлкә булараҡ айырылып тора. Кем-кем, журналистар быны яҡшы белә: улар үткәргән сараларҙан бушамай киткән саҡтар бик йыш ҡабатлана йыл әйләнәһенә. Яңы йыл байрамы алдынан ғына Өфө ҡалаһында, мәҫәлән, мәғариф өлкәһенә ҡағылышлы бер нисә сара үткәрелде. Уларҙың барыһында ла БР Мәғариф министрлығы, баш ҡала округы һәм район хакимиәттәре вәкилдәре, мәктәп директорҙары, уҡытыусылар ҡатнашты.

Йөҙҙән артыҡ милләт йәшәгән республикабыҙҙа милли мәҙәниәт һәм туған тел мәсьәләләре һәр ваҡыт беренсе урында ҡала килә. IV Халыҡ-ара Аҡмулла уҡыуҙары сиктәрендә Башҡорт дәүләт педагогия университетында үткән түңәрәк ҡор ҙа туған тел мәсьәләләренә арналды. Унда юғары уҡыу йорттарында, мәктәптәрҙә туған телдәрҙе уҡытыуҙың сифатын күтәреү, туған телдәрҙе һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә милли-мәҙәни берекмәләрҙең роле ҡаралды һәм киләсәктә милли мәктәптәрҙең матди-техник базаһын нығытыуға ҙур иғтибар бүлергә, милли мәғариф мәсьәләләре һәм фәнни кадрҙар әҙерләү буйынса институт төҙөргә, тигән ҡарар ҡабул ителде. Шуныһы ҡыуаныслы: туған тел уҡытыуға арналған ошондай һөйләшеүҙәр ойоштороу был өлкәгә ҡағылған проблемаларҙы етәкселәргә еткерергә, ә унда яңғыраған тәҡдимдәр һәм фекерҙәр белем биреүҙе тағы ла камилыраҡ итергә мөмкинлек бирә.

Милли мәғарифҡа арналған тағы ла бер сағыу сара Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында үтте. Республиканың бөтә район һәм ҡалаларынан йыйылған 100-гә яҡын башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы БР Мәғариф министрлығы тарафынан ойошторолған семинарҙа туған телдәрҙе өйрәнеүҙе ойоштороу мәсьәләләре буйынса фекер алышты. Өфө мәктәптәрендә генә лә бөгөн 731 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡыта. Улар менән 134 туған телдәр буйынса директор урынбаҫары эшләй. Ниндәй генә ҡыйынлыҡтар булмаһын, мәктәптәрҙә туған телдәрҙе һәм дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу яйға һалынып килә, бында туған телдәр буйынса директор урынбаҫарҙарының эше баһалап бөткөһөҙ. Мәктәптәрҙә туған тел дәрестәре сәғәттәрен кәметеүгә юл ҡуймау, ата-әсәләр араһында аңлатыу эштәре алып барыу кеүек мәсьәләләрҙе лә хәл итергә бурыслы туған телдәр буйынса директор урынбаҫарҙары, шуға ла уларҙың айырыуса мәғлүмәтле булырға тейешлеге тураһында Мәғариф министрлығының милли мәғариф һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлеге етәксеһе Рәйсә Абдрахман ҡыҙы Күзбәкова билдәләп үтте.

Киләсәк быуынды тәрбиәләүҙә уҡытыусыларҙың ғына түгел, ә 2006-2007 йылда Өфө ҡала округы хакимиәте ярҙамында булдырылған ҡала ата-әсәләр комитетының да өлөшө ҙур. Уҡыу йылының уртаһы ғына булыуға ҡарамаҫтан, календарь йылдың аҙағында В. Комаров исемендәге Балалар ижады һарайында ҡала ата-әсәләр комитеты Өфө ҡала округы хакимиәте, мәғариф идаралығы менән берлектә ағымдағы йылға йомғаҡ яһап, киләһе йылға бурыстар ҙа билдәләне. Унда шулай уҡ баш ҡала белем биреү системаһының инновацион үҫеше, уҡыусыларҙың сәләмәтлеге һәм хәүефһеҙлеге, үҫмерҙәр енәйәтен иҫкәртеү, киләсәк быуынға белем биреүҙә һәм балаларҙы тәрбиәләүҙә ата-әсәләр эшмәкәрлеген әүҙемләштереү, мәктәп һәм балалар баҡсаларында уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороу мәсьәләләре лә ҡаралды.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ ЙЫЛ ТӨНӨНДӘ...

## биш мең милиционер тәртип һаҡланы

**Башҡортостанда Яңы йыл төнөндә 5 мең милиционер йәмәғәт хәүефһеҙлеген тәьмин итте.**



Артабан көн һайын Яңы йыл һәм раштыуа байрамдары үткәнсе 1,5 мең эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре тәртип күҙәтәсәк. 2009 йылдың 30 декабренән 2010 йылдың 10 ғинуарына тиклем Башҡортостан милицияһының бөтә гарнизоны хеҙмәти бурыстың көсәйтелгән вариантына күсте. Шәхси составтың һәм махсус техниканың байрам көндәрендә хеҙмәт башҡарыуға әҙерлеген БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев һәм БР буйынса эске эштәр министры Игорь Алешин тикшерҙе.

Республикала енәйәт эшен асыу 11 ай эсендә 65,4 процент тәшкил итеүе лә билдәләп үтелде. Был Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында иң яҡшы күрһәткестәрҙең береһе.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Бөгөн иң мөһим мәсьәлә булып йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү тора. Былтыр йәш ғаиләләргә ярҙам итеү программаһы сиктәрендә 850 ғаилә федераль һәм республика бюджетынан ярҙам алды. 285 йәш белгес һәм йәш ғаилә "Ауылдың социаль үҫеше" программаһы буйынса торлаҡ шарттарын яҡшыртты. "Үҙ йортом" программаһы сиктәрендә төҙөлгән килешеүҙәрҙең 669-ы - йәш ғаилә. Был программалар эшләй башлағандан алып ун мендән ашыу йәш ғаилә дәүләт ярҙамының төрлө формаһы менән файҙалана алған.

✓Яҡын арала республикала кадрҙар потенциалын үҫтереү буйынса эштәр комплексы әҙерләнәсәк. Йәштәрҙең кадрҙар потенциалы юғары. Бөтә Рәсәй дәүләт йәштәр сәйәсәте өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең һөнәри оҫталығы конкурсында республиканың ике вәкиле лауреат булды. "XXI быуат лидеры" Бөтә Рәсәй конкурсы һөҙөмтәләре буйынса өс кеше төрлө номинацияларҙа еңеүсе исемен алды. Бөтә Рәсәй инновацион конкурс сиктәрендә Башҡортостан вәкилдәре тәҡдим иткән туғыҙ проект иң яҡшылар иҫәбенә инде. Был проекттар туриндустрия, медицина, нефть табыу һәм масс-медиа өлкәһенә ҡағыла.

✓Талантлы йәштәргә ярҙам итеү йүнәлеше буйынса ла байтаҡ эштәр башҡарылған. Әлеге ваҡытта бындай йәштәрҙең берҙәм электрон мәғлүмәти базаһын булдырыу процесы бара. 1990 йылдан йыл һайын әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура, фән һәм техника өлкәһендә дәүләт йәштәр премияһы, ә 1997 йылдан йәш ғалимдарға һәм ғилми коллективтарға гранттар булдырылған. Юғары һәм урта һөнәри уҡыу йорттары студенттарына, аспиранттарға һәм докторанттарға Президент стипендияһы, Әхмәтзәки Вәлиди, Мифтахетдин Аҡмулла, Мостай Кәрим, Ирек Мөксинов исемдәрендәге премиялар тапшырыла.

✓Баш ҡаланың Карл Маркс урамында "Өфө" халыҡ-ара аэропорты" асыҡ акционерҙар йәмғиәте пассажирҙарын хеҙмәтләндереү буйынса яңыртылған авиакассалар асылды. Уны асыу тантанаһында БР төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министры Рауил Ибәтуллин, Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов, йәмғиәттең генераль директоры Салауат Ҡотошов ҡатнашты.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се Республика балалар йорто тәрбиәләнеүселәренең күбеһе, бәлки, Ҡыш бабайҙың барлығына ышанмайҙыр, әммә улар Яңы йыл алдынан мөғжизәле ваҡиғаларҙың әкиәттә генә түгел, ә тормошта ла булыуын яҡшы беләләр. Күптән түгел уларға яҡын дуҫтары - "Салауат Юлаев" хоккей клубынан тренерҙар С. Герсонский, В. Сафин менән хоккейсылар үҙҙәре ҡунаҡҡа килде.**

# ЮЛАЕВСЫЛАР...

## шатлыҡ өләште



Республиканың данын бөтә донъяға танытыусы хоккей клубы менән балалар йорто араһындағы дуҫлыҡ күптән дауам итә. Хоккейсылар бынан өс йыл элек балалар йорто тәрбиәләнеүселәре менән осрашырға теләк белдергәс, уға барыһы ла дәррәү әҙерләнә һәм беренсе осрашыуҙа хоккейсылар уларҙың яҡын дуҫына әйләнә. Ошонан һуң юлаевсылар балаларҙың хәлен даими һорашып тора, кәрәк саҡта ярҙам да итеп ебәрә. Әйтергә кәрәк, осрашыуҙар исем өсөн генә үткәрелмәй. Был юлы ла балалар хоккейсыларҙы тәүҙә балалар йорто һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейҙарына алып инә, балалар йорто буйлап экскурсия үткәрә. Һуңынан концерт ҡуйлар, ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнап ишеттерәләр, юлаевсылар - үҙҙәренең, хоҙайбирҙиндар үҙҙәренең уңыштары тураһында һөйләй.

- "Салауат Юлаев" хоккей командаһы хәҙер беҙҙең ғаилә ағзаһына әйләнде, тип әйтһәм дә яңылышмаҫмын, - ти 1-се балалар йорто директоры Фәнисә Малик ҡыҙы Бәҙретдинова. - Балалар уларҙы һәр саҡ шатланып, һағынып көтөп ала, команда уларҙы баш ҡалала үткән һәр матчҡа саҡыра, беҙҙең балалар хәҙер Өфө-Арена ишектәрен ҡыйыу асып, үҙ туғандарының йортона барған кеүек инәләр.

Балалар йортонда хоккей яратмаған бер бала ла юҡ. "Уйын ваҡытында шундай ҡырыҫ, уҫал күренгән ағайҙар тормошта бөтөнләй икенсе төрлө, улар шул тиклем ябай, изге күңелле", - ти балалар. Малайҙар ғына түгел, ҡыҙҙар ҙа спортсыларҙың шәхси тормошо менән ҡыҙыҡһына, уларға ҡағылышлы һәр мәғлүмәтте йыйып бара. Былтыр ихатала хоккей ҡабы ҡойғандар, буш ваҡыттарында малайҙар унда хоккей уйнарға сыға. Дуҫтарының был теләген хуплап, юлаевсылар быйыл уларға коньки һәм сәкәндәр бүләк иткән.

-Беҙҙең балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр өсөн бындай осрашыуҙар бигерәк кәрәк, - ти Фәнисә Малик ҡыҙы. - Балаларҙың аралашыу даирәһе киңәйә, улар, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, юғарыраҡҡа ынтыла башлай, уйҙары, хыялдары үҙгәрә. Малайҙарҙың баҫып тороуы ла хатта үҙгәрҙе, насар ғәҙәттәргә, тәртип боҙоуға юл ҡуймайҙар. Янйыраҡ баш ҡаланың "Динамо" футбол клубы ла беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итергә теләк белдерҙе.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Хоккей әлеге мәлдә иң популяр спорт төрҙәренең береһе иҫәпләнә, ә "Салауат Юлаев" хоккей командаһын белмәгән, унда уйнаған спортсылар менән ҡыҙыҡһынмаған бер генә кеше лә юҡтыр, моғайын. Юлаевсыларҙың ата-әсә наҙынан, хурсыуынан мәхрүм ҡалған балаларға игтибары яҙмышына үпкәләп, күңеле өшөп йөрөгән сабыйҙарҙың киләсәген үҙгәртмәй ҡалмаҫ, бынныһына иманым камил.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

# АТ САБЫШЫ...

## күңелле сара

**Яңыраҡ Таһир Күсимов исемендәге "Аҡбуҙат" ипподромында Орлов һәм Ярыш тоҡомло аттар ҡатнашлығында бәйге үтте.**

2400 метр дистанцияла 4йәштән өлкәнерәк аттар араһында XX быуаттың иң яҡшы сабыш аты исемен йөрөткән "Сорренто" призына бәйге иң көсөргәнешлеһе булғандыр. Өфө, Силәбе, Ҡаҙан һәм Мәскәү ипподромдарында данлы еңеүҙәр яулаған аттар ярышында тәүҙә Венер Абсаликов етәкселегендәге "Уралагротехсервис" йәмғиәтенең Фохт исемле аты алдынғылыҡты бер кемгә лә бирмәне. Әммә финишҡа беренсе булып Вандефул инде.

Ошо уҡ көндө маршал Рокоссовский Мемориалы ла уйнатылды. Унда йола буйынса 2005 йылғы һәм унан олораҡ Орлов аттары 1600 метр дистанцияла ярыша. Ника ҡушаматлы саптар еңеүсе булды, күсере - Венер Абсалиҡов. 1600 метрлыҡ дистанцияға Орлов призына 2 минут 25,1 секунд ваҡыт күрһәткән Факир исемле ат лайыҡ булды. Ошо уҡ дистанцияла Асыҡ приз өсөн көрәшеүсе арғымаҡтар араһында Галета финишҡа беренсе килде. Ошоноң менән "Аҡбуҙат" ипподромында 2009 йылғы миҙгел тамамланды. Яңы йыл ат сабышы яратыусыларға тағы ла яңы рекордтар һәм онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар бүләк итер, тигән ышаныста ҡалабыҙ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҒӘФҮ ИТЕРЛЕК БУЛҺА...

**Ҡултамғамды ҡуйып, повестка алдым, ләкин медицина комиссияһына барманым. Миңә ни булыр?**

- Штраф түләтәсәктәр. Әлбиттә, ғәфү итерлек сәбәптәрегеҙ булһа, үҙегеҙ өсөн яҡшыраҡ. РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының "Медицина тикшереүенә килмәү" тигән статьяһы буйынса 100 һумдан 500 һумға тиклем административ штраф түләтеү ҡарала. Ә инде бындай ҡылыҡ даими ҡабатлана башлаһа, енәйәт яуаплылығына тарттырыуҙары ла ихтимал (РФ Енәйәт кодексы, 328-се статья).

## АРМИЯЛА ЙӘБЕРЛӘЙҘӘРМЕ?

**Улым армияға ҙур теләк менән китте. Ул спортсы, колледж тамамланы. Әле часта уны йәберләүҙәре, гел генә мыҫҡыл итеүҙәре хаҡында яҙа. Бөтә урында ла шундай хәлдәр, тип уйламайым, шуға күрә улымды икенсе берәй частҡа күсерергә теләйем. Был мөмкинме?**

- Икенсе частҡа күсереү кеүек сара йыш ҡулланылмаһа ла, нигеҙҙә, был мөмкин. Иң тәүҙә һеҙгә улығыҙ әле хеҙмәт иткән часть командиры менән һөйләшергә, улығыҙ менән булған хәлдәр тураһында бәйән итергә кәрәк. Был турала хәрби прокуратураға ла хәбәр итергә йыйынныуығыҙ хаҡында белдерегеҙ. Был һөйләшеүҙән фәтүә булмаһа, хәрби прокуратураға, һалдат әсәләре комитетына мөрәжәғәт итегеҙ. Был осраҡта улығыҙ ғаризаға ҡушып үҙе менән булған хәлдәр тураһында ентекләп (хәл-ваҡиғаларҙы, көнөн, сәғәтен, фамилияларҙы күрһәтеп) яҙырға тейеш.

## ҺАЛЫМ АЙЫРМАҺЫ

**2007 йыл ҡыҙым вузға ситтән тороп уҡырға инде. Уҡыу өсөн түләгән суммаға һалым айырмаһы алырға тип, һалым хеҙмәтенә документтар әҙерләп биргәйнем, уны түләүҙән баш тарттылар. Миңә үҙ хоҡуғымды нисек яҡларға?**

- РФ Һалым кодексы буйынса (219-сы статьяның 2-се пункты) һалым түләүсе ата-әсә балаһын уҡытыуға сарыф иткән сумманың һалым айырмаһын ҡайтарып алырға хоҡуҡлы. Был осраҡта законда шундай сикләү бар: айырма ситтән тороп уҡыусылар өсөн түләнмәй.

## КИЛЕШЕҮГӘ НИ ЕТӘ

**Улыма 18 йәш тулды, тимәк, атаһынан алимент килеү ҙә туктаясаҡ. Бала көндөҙгө бүлектә уҡып йөрөй. Бындай осраҡта алимент түләү дауам итергә тейеш, тип ишеткәйнем, шул дөрөҫмө?**

- РФ Ғаилә кодексының 2-се бүлегендәге 120-се статьяға ярашлы, бала бәлиғ булғандан һуң суд ҡарары нигеҙендә башҡарылыусы алимент туҡтатыла. Әгәр бындай түләүҙәр нотариуста раҫланған килешеү буйынса башҡарылһа, ул килешеүҙә ҡаралған осор буйына һәм унда телгә алынған башҡа осраҡтарҙа (мәҫәлән, бала вузда уҡыған хәлдә атаһы алимент түләүҙе дауам итә, тип ҡаралған булһа) түләнә.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Күп кеше бил, тубыҡ, быуындар ауыртыуынан яфалана. Ябай ғына ысулдар менән дауалап ҡарайыҡ.

❖ Бер нисә алоэ япрағын ит турағыстан үткәреп, 50 грамм һутҡа 100 грамм бал, 150 грамм таҙа араҡы ҡушырға һәм ауыртҡан ергә компресс эшләргә. Был төнәтмәне оҙаҡ һаҡлап була.

❖ 200 грамм тоҙ, 100 грамм ҡоро гәрсисте (горчица) шул уҡ күләмдә кәрәсин өҫтәп, болғайһың. Килеп сыҡҡан май менән ятыр алдынан һеңеп бөткәнсе ауыртҡан урынды ышҡыйһың.

❖ Эре генә йылға ҡомон ҡыҙҙырып, оҙонса итеп тегелгән моҡсайҙарға һалаһың да, ауыртҡан урындарға ҡуяһың. Ҡомда төрлө файҙалы минераль матдәләр, металл бар. Йәйгеһен эҫе ҡомға күмелеү ҙә шифалы.

❖ 1 ҡалаҡ әрем сәскәһен 300 грамм ҡайнар һыуҙа төнәтергә һәм ауыртҡан ергә компресс яһарға.

❖ Бәпембәнең япрағы һәм тамырынан алынған һутты шул уҡ күләмдәге кишер һәм шалҡан һутына ҡушып, арҡаны ышҡыйһың, көнөнә 1-2 ҡалаҡ эсәһең. Умыртҡа һөйәге ауыртыуын баҫа.

❖ Дегәнәк (лопух) тамырын 5-10 минут әкрен утта 0,4 литр һыуҙа ҡайнатҡанда мәтрүшкә, кейәү үләне ҡушаһың. 2-3 сәғәт төнәтәһең. Ас көйөнсә йәки ашағас, 2-3 сәғәттән һуң эсәһең. Һыҙланыуҙарҙан да, яман шештән дә һаҡлай, ярҙамы тейә.

## Бауырҙы таҙалау

Бер ҡалаҡ үҫемлек майын тел аҫтына һалып, ауыҙығыҙҙы сайҡап, төкөрөгөҙ. 15-20 минуттан ауыҙҙа ҡалған май аҡ төҫкә инә, бер тамсыһын да йотмай, төкөрөгөҙ, сөнки ул бауырҙағы зарарлы матдәләрҙе үҙенә һеңдергән була. Ауыҙығыҙҙы сайҡағыҙ. Был ысулды 1-2 аҙна эшләһәгеҙ, бауыр шлактарҙан, тәнегеҙ төрлө токсиндарҙан таҙарыр.

## Варикоз һәм алма

Уртаса ҙурлыҡтағы антоновка алмаһын 1 литр ҡайнар һыуға һалып, 2 сәғәт төнәтергә лә, иҙгеләп, бутҡа итергә, һөҙөргә һәм иртән ас ҡарынға, кис йоҡо алдынан эсергә. Хәл яҡшырғансы дауам итергә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

*✓ Үҙе лә һиҙмәҫтән, Зәйнәп тертләне. Туҡта, тәрбиә, белем тигәне дөрөҫ тә ул, ә бына әсә һөйөүен бирҙеме ул? Ҡыҙҙарын яраттымы, иркә һүҙҙәр әйттеме? Юҡ, быға ваҡыты булманы.*




# ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Йөрөү ҡағиҙәләре

● Туралығына ҡыҙығып, ҡарлы һәм бысраҡ юлдан йөрөмәгеҙ. Юлдарҙың тураһы тура түгел, ә яҡшы һәм саф һауалы булғаны тура була. Быны бер ваҡытта ла онотмағыҙ.

● Ҡыҫтау урындарҙа кеҫә, сәғәт һәм башҡа әйберҙәрегеҙҙе яҡшы һаҡлағыҙ.

● Кәрәкмәгәндә зонтиктарығыҙҙы күтәрмәгеҙ, күтәргәндә күҙегеҙҙе ҡапламағыҙ.

● Дуҫ һәм таныштар осрағанда хөрмәтләп сәләм бирегеҙ. Әгәр улар алдан бирһәләр, ихтирам менән ҡайтарығыҙ. Бөйөк кешеләр булһа, хөрмәт күрһәтегеҙ. Әгәр риза булһалар, ҡулдарын үбегеҙ. (Ләкин ҡалаларҙа, баҙарҙар һәм төрлө мәҙһәптәр күп булған урындарҙа үбеү килешмәй.)

● Урамда йөрөгәндә ашамағыҙ. Хәжәт өсөн ултырмағыҙ. Бындай нәмәләр тәрбиәһеҙлек билдәһе.

● Бөйөк кешеләр менән һөйләшеп йөрөгәндә, уларҙың һул яғынан бер тигеҙ йөрөгөҙ.

● Ололар менән өйҙәргә, пароходтар һәм вагондарға ингән һәм сыҡҡан ваҡытта юл күрһәтеү өсөн уларҙың алдарынан йөрөгөҙ.

● Кемгә булһа ла зарар килтереү, шәриғәткә һәм әҙәпкә ҡаршы эштәрҙе эшләү өсөн бер аҙым да эшләмәгеҙ.

## Тимер юл һәм пароход тәртиптәре

● Пароход һәм тимер юлы менән сәфәр итергә булһағыҙ, сәфәр итеү ваҡытын белегеҙ. Унан ярты сәғәт элек әҙер булығыҙ, кешеләр менән төрткөләшмәгеҙ, әйберҙәрегеҙҙе тәртип менән урынлаштырығыҙ, юлдаштарығыҙ менән мөләйем ултырығыҙ, әҙәпле булығыҙ, берәүгә лә яман һүҙ һөйләмәгеҙ, мәсхәрә итмәгеҙ, ихтирамһыҙлыҡ күрһәтмәгеҙ. Һеҙҙең менән һөйләшергә теләүсе кеше менән ихтирамлы һөйләшегеҙ. Ләкин дин һәм мәҙһәп низағтары сығарырға теләүселәрҙән ғәфү үтенегеҙ. Сөнки бындай низағтар һис бер ваҡытта ла файҙа килтермәй.

● Пароходта ултырғанда унының исемен, ҡайһы ширҡәттеке йәки кешенеке булыуын, ултырған вагондың номерын белегеҙ. Уларҙы белгәндә, әйберегеҙ онотолоп ҡалһа, йәки үҙегеҙ тороп ҡалһағыҙ, әйберҙәрегеҙҙе табырға һәм телеграмма ебәрергә еңел була.

● Барасаҡ урынығыҙға яҡынлашҡас, әйберегеҙҙе йыйып бәйләгеҙ, нисә киҫәк булғанын хәтерләгеҙ. Поезд йәки пароход туҡтамайынса сыҡмағыҙ.

## Йоҡо ҡағиҙәләре

● Тәбиғәт ҡушҡанса кискеһен йоҡлағыҙ. Йөҙтүбән һәм салҡан ятмағыҙ, бер яҡҡа ятығыҙ. Сөнки тәүге ике рәүештә ятыу ҡурҡыныс төштәр күреүгә сәбәп була.

● Йоҡо ваҡытын тәртипкә һалығыҙ. Туғыҙ йәки ун сәғәттән дә ҡалмай ятып, биштә йәки алтыла тороғоҙ. Йоҡоғоҙ бөткәндән һуң ятмағыҙ, кәрәккән йоҡоно ла ҡалдырмағыҙ. Сөнки йоҡо ҡалдырыу ашҡаҙан һәм аҡыл ауырыуҙарына, аҙаҡтан нервы ауырыуҙарына килтерә.

● Ҡарттарға - биш, утыҙ йәштән юғары булғандарға - алты, йәштәргә - һигеҙ, бәлә кәйҙәргә ун сәғәт йоҡларға тәҡдим ителә.

## ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

**Беҙҙең гәзит сыға башлағандан алып йәшәй был "Донъя - ҡуласа" тигән рубрика. Кеше йәшәйешенең, кешенең ҡылғандарының әсе һабағы булыр ваҡиғалар һүрәтләнә унда баҫылған мәҡәләләрҙә. Уларҙың авторҙары - уҡыусыларыбыҙ үҙҙәре. Шуға ла уҡыусыларыбыҙға: "Әйҙәгеҙ, был рубриканы артабан да дауам итәйек. Йәнәшәгеҙҙә фәһем, һабаҡ бирерлек күпме яҙмыштар бар - күҙ һалығыҙ уларға һәм ул хаҡта башҡаларға ла һөйләгеҙ. Ғәйбәт итеп түгел, ғибрәт итеп" , - тип өндәшәбеҙ. Донъя, ысынлап та, ҡуласа бит ул. Йылдарыңдың, яҡындарыңдың, матур хистәреңдең, ғөмүмән, Хоҙай биргәндәрҙең ҡәҙерен белмәһәң, ул ҡуласа... килтерә лә баҫа булыр. Ошоно иҫкәртер өсөн кәрәктер ғибрәтле яҙмыштар тураһында һөйләү. Шулай итеп, уҡыусыларыбыҙҙан хаттар көтәбеҙ.**

# КЕШЕГӘ КӘРӘКЛЕ БУЛЫУ...

## иң ҙур бәхет

**Зәйнәп өшөп уянды. Затлы йыһаз, йомшаҡ келәмдәр менән тулған фатирында, ҡиммәтле япмалы карауатында һуңғы осорҙа йылылыҡ тапмай. Ә көҙ яңы башланып тора.**

Аяҡ-ҡулы һәр ваҡыт өшөп, ирене күгәреп йөрөгәнгә, дауаханаға ла барғайны. Ҡан йөрөшө боҙолған, тип, табип билдәләгән дауалау курсын үтте. Тик дарыуҙарҙың да ярҙамын тойманы. Киреһенсә, уларҙан һуң кисен йоҡламай, ә иртән тора алмай яфаланды. Йоҡоһоҙлоҡ иң ҙур ғазап икәнлеген шунда аңланы ҡатын.

Урынынан тороп, ойоҡбаш, йылы халат кейеп ятһа ла, өшөгән тәне ҡабат йылынманы. Йоҡоһо тамам осто, таң атырға байтаҡ ваҡыт булһа ла кухняға сыҡты. Стеналағы шәмдәлен ҡабыҙҙы. Шунда Зәйнәп гәлсәр шәмдәлдең тамсыға оҡшағанлығына иғтибар итте. Әйтерһең дә, унын күҙ йәше фатирындағы ҡотоп һыуығында туңып, боҙмармаҡҡа әйләнгән. Боҙҙо иретергә теләнеме, әллә, киреһенсә, өшөгән бармаҡтарын йылытырға иттеме, ҡуш усын тейҙереүе булды, шәмдәле һүнде лә ҡуйҙы. Ҡатын ҡараңғылыҡта ҡалды. Өшөгән бите буйлап аҡҡан күҙ йәшен дә тойманы.

Олоғайған көнөндә яңғыҙ ҡалырын белһә, ул, һис шикһеҙ, икенсе төрлөрәк йәшәр ине. Бер уйлаһаң, дөрөҫ йәшәмәнеме ни? Ваҡытында белем алды, мәлендә кейәүгә сыҡты, балалар тапты. Һөйөп-һөйөлөп кенә йәшәр сағында тормош иптәше фажиғәле үлеп китһә лә, уның рухына тоғролоҡ һаҡланы, сит ир-егет менән сыуалып, гонаһ шомлоғона батманы. Балаларын тормош юлына лайыҡлы баҫтырыуға бөтә көсөн һалды. Тик ниңә һуң байрамдарҙа түгел, тыуған көнөндә булһа ла килеп, яйлап ултырып, әсәһенең хәлен белешеп китмәйҙәр? Юҡ, бүләкһеҙ ҡалдырмай улар. Яңы йылға ла, 8 Мартҡа ла затлы бүләк әҙерләйҙәр. Тик уны бер-береһе аша биреп ебәрәләр, йә ашығыс ҡына инеп сығалар. Ишек төбөнән генә хәл-әхүәл белешеп, тиҙерәк сығыу яғын ҡарайҙар. Туғандары ла урап үтә. Ни булды һуң, ниңә тормошо ҡырҡа үҙгәрҙе?

Ҡатын уйға ҡалды. Баҡтиһәң, бер нәмә лә үҙгәрмәгән. Тик эшләгәндә быға иғтибар итмәгән генә. Хаҡлы ялға сығыуына бына өс ай булып килә. Унда-бында хеҙмәттәштәре шылтыратҡанды иҫәпләмәгәндә, уның хәлен белешкән кеше лә юҡ. Яҡын-тирәһендә бер яҡыны ла булмауын яңы аңланы Зәйнәп. Балалары башҡалар араһында кәм-хур булмаһын, тип, көнө-төнө эшләне ул. Ял-байрамдарҙа өйөнә эш алып ҡайтты. Шөкөр, балаларына лайыҡлы тәрбиә, әсә наҙын, һөйөүен кәрәгенсә бирҙе. Үҙе лә һиҙмәҫтән, Зәйнәп тертләне. Туҡта, тәрбиә, белем тигәне дөрөҫ тә ул, ә бына әсә һөйөүен бирҙеме ул? Ҡыҙҙарын яраттымы, иркә һүҙҙәр әйттеме? Юҡ, быға ваҡыты булманы.

Уларҙың тыуған көнөн нисек үткәрә ине һуң әле? Байрам, тип, табын ҡороп, туғандарын, ҡыҙҙарының әхирәттәрен йыйғанын иҫләмәй. Кәрәкле берәй әйбер һатып ала ла, шуның менән үтә лә китә ине. Иптәштәре ҡотларға килергә уйлаһа, бысраҡ ташып йөрөмәһендәр, тиер ине. Туғандарын да теләһә ниндәй сәбәп табып биҙҙерҙе, үҙе лә уларға барып йөрөмәне, өйөнә лә саҡырманы. Туй, тыуған көндәрендә, әлбиттә, иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Аҡсалата ла ярҙам итте, бүләген дә ебәрҙе. Быларҙың бөтәһендә ул ваҡыт юҡлығы, саманан артыҡ мәшғүллеге менән аҡланды.

Төн буйы ултырып шулай таң аттырҙы ҡатын. Ҡаршылағы йорттағы фатирҙарҙа берәм-берәм ут ҡабынды. Зәйнәп алдында биш, ун ғына түгел, егермеләгән-утыҙлаған экран пәйҙә булды. Һәр ғаилә үҙе бер донъя, тарих икәнлегенә шунда төшөндө. Бына бер әсә балаһын һөйөп-яратып ҡына йоҡоһонан уятты, икенсеһендә олатаһы ҙурайып бөткән улын карауатынан күтәреп тигәндәй алды, күҙенән һөйөү эркелә, нимәлер һөйләп, арҡаһынан яратып ҡына йыуынырға оҙатты.

Бер "экран"да йәш ир кәләшен үбеп уятты. Быға тиклем Зәйнәп бындай күренештән ерәнеп булмаһа ла, сирҡанып, яратмайынса ситкә боролор ине. Бөгөн иһә улайтманы. Ошонан да матурыраҡ, күркәмерәк, татлыраҡ мөнәсәбәтте күргәне юҡ ине уның. Ҡарағандан-ҡарағыһы килде, уларҙан килгән йылылыҡтан, сихри нурҙан ләззәтләнде.

Үҙе лә һиҙмәҫтән, йәштәрсә етеҙлек менән һикереп торҙо. Бөтә бүлмәләргә ут ҡабыҙҙы, күптән асылмаған ауыр ҡорғандарын ситкә тартты, өйгә шәфәҡ нуры таралды. Сәйнүгенә яңыртып һыу ағыҙҙы ла, күрше әбейҙе сәйгә саҡырҙы. Унының аптырап, баш тартырға ла өлгөрмәне. Күңелен бер ҡасан да булмаған тойғо биләп алды Зәйнәптең. Күршеһе менән сәй эсеп, күстәнәс биреп оҙатып ҡалғас, ҡыҙҙарына шылтыратып, ғаиләләре менән бергә киске ашҡа саҡырҙы. Көнө буйы бешеренде-төшөрөндө, балаларына бүләк әҙерләне. Улары килгәс, бар наҙын-һөйөүен күрһәтте. Ҡыҙҙарының, кейәүҙәренең рәхмәтле ҡарашын, унының да бигерәк, һоҡланыу хисен тойҙо. Шунан рәхәтлек кисерҙе. Был тормошта икенсе кеше өсөн йәшәү - иң ҙур бәхет, үҙеңдең кемгәлер кәрәклегеңде тойоу иң оло шатлыҡ икәнлеген ошо йәштә генә аңланы. Зәйнәп беренсе тапҡыр үткән көнөнә рәхмәт әйтте.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ЙОНДОҘЛОҒОҢ НИНДӘЙ...*

# РУХИ КӨСКӘ ЭЙӘ ҺҮҘ ЭҘЛӘЙЕМ

Барыҫ һәр саҡ табыш артынан ҡыуа. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә, тигәндәй, мин дә һәр саҡ юлдамын. Эҙләнмәһәң, эҙһеҙ юғалыуың да бар. Ғүмерем буйына яңы һүҙҙәр эҙләйем, уларға тап булһам, ат башындай алтынға юлыҡҡандай ҡыуанам. Халҡым иҫ киткес батыр ҙа, талантлы ла. Башҡорт халҡы - бөйөк Салауатлы, эпослы халыҡ, унын аҡыллы, бай, яғымлы һүҙҙәре күңелемде байыта.

Эй, Уралым, һинән ҡырҡып алһаң,
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың.
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Урал йырындағы был һүҙҙәр тыңлаған һайын тетрәндерә, уларҙың һәр береһе үҙ урынында. Был һүҙҙәрҙең береһен генә ҡуҙғатһаң да, иҫ киткес илаһилығы кәмер кеүек. Ғүмеремдә бер тапҡыр ғына булһа ла сихри рухи көскә эйә булырҙай шундай һүҙҙәр яҙа алһам, донъяла минән дә бәхетле кеше булмаҫ ине. Юлығыҙ гел уң булһын, ҡәҙерле милләттәштәр! Яңы йыл менән!

*Тимер ЙОСОПОВ, халыҡ шағиры,*
*Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.*

УЙЛАН, КЕШЕ!

# ЯЛҒАН ЙОНДОҘҘАРҒА ЭЙӘРЕҮ...



## яман көс яғына ауышыу ул

**Йәмғиәт - һыу һымаҡ, ниндәй һауытҡа ҡояһың, ул шул һауыттың рәүешен ала. Илебеҙҙең ниндәй "һауытта" икәнен уның бөгөнгө хәленә ҡарап аңларға була.**

Иң тәүҙә үҙәк матбуғатҡа күҙ һалайыҡ. Йәмғиәтебеҙҙең нимә менән йәшәүен, нимә менән тын алыуын шунда уҡ аңларға була. Атамаһы брендҡа әйләнгән баҫмалар, каналдар "йондоҙ" тип аталған шәхестәрҙең шәхси тормошон соҡоп, шуның нигеҙендә милли идея тыуҙырыу менән шөғөлләнә. "Беҙҙең ысынбарлыҡ ошо һәм унан башҡа ысынбарлыҡ юҡ", тип раҫлай һымаҡ улар. Мәғлүмәт саралары "тормош көҙгөһө" тиҙәр, ләкин күпселектә улар барыһын да боҙоп күрһәтеүсе көҙгө. Йыш ҡына улар "көҙгөлә" үҙҙәренә, йә үҙҙәренең хужаларына уңайлы шәүләне генә күрһәтеү менән мәшғүлдәр. Һөҙөмтәлә, ҡыйыш көҙгөгә ҡарап, йәмғиәт үҙен "төҙәтә" башлай. Ошо көҙгөләге кеүек күренгеһе килә. Ләкин шул көҙгөгә ни тиклем нығыраҡ яраҡлашырға тырыша, шул тиклем уның һүрәте яманыраҡҡа, йәмһеҙерәккә әйләнә.

Беҙҙә һәр ваҡыт алғы планға "йондоҙҙар" сыға. Телеэкрандарҙа барған билдәле "Боҙ шоуы" проектын ҡарағыҙ. Унда сығыш яһаған "йондоҙҙарҙы" нисек кенә сәйнәмәнек. Һәм ошо "аҙыҡ" халыҡҡа тәмләп-тәмләп ҡаптырыла. Күптәр иғтибарын ошо ваҡиғаға ғына йүнәлтә, ғаиләләрендәге проблемаларға иғтибар итмәйенсә, меңәр километрҙарҙа, бөтөнләй башҡа донъяла йәшәгән, таныш булмаған кешеләрҙең тормошон үҙҙәренекенә ҡарағанда ла өҫтөнөрәк ҡуя. Ысынбарлыҡ тураһында онотоп, икенсе кешенең яҙмышы менән йәшәй башлай, үҙенең хәле тураһында уйламай. Сөнки "аҡ ҡарға" фобияһы уға йәмғиәт фекеренән ситләшергә мөмкинлек бирмәй, башҡалар һымаҡ булырға саҡыра. Үҙе көйгән командаһың еңеүе балаһы тыуыуға ҡарағанда ла мөһимерәк, яратҡан йырсыһының ҡылығы, ни тиклем аҙғын һәм түбән булмаһын, уға өлгө алыу өсөн миҫал.

"Йондоҙ" тип бөгөн теләһә кемде күрһәтәләр, өйөрөлтәләр һәм танытала. Уның тормошон эталон итеп халыҡҡа сығаралар. Ул бай, матур, билдәле, уңышлы. Шул уҡ ваҡытта уның аҙғын ҡылыҡтары ла бар. Шуға нигеҙләнеп, бар халыҡты ошондай булырға саҡыралар. Бөтәһе лә "йондоҙ" булып китә алмай, ләкин аҙғынлыҡта уҙышта яратҡан кумирҙарынан да арттырып ебәреүҙәре мөмкин. Шулай итеп, миллионлаған халыҡ нәфсе, иң түбән теләктәр ҡоллоғона ырғытыла һәм ҡорбан була.

Ғәйбәт диңгеҙенә, алдаҡ маҡсаттар донъяһына батырыусылар халыҡҡа, беҙ һеҙҙең күңелегеҙҙе асабыҙ, тик һеҙ был хаҡта уйланмағыҙ, тип әйтәләр төҫлө. Ана, билдәле йырсының бөтмәҫ гастролдәрен ҡарағыҙ, "Боҙ шоуы"н күҙәтегеҙ, кемдеңдер дан минутын күҙҙән ысҡындырып ҡуймағыҙ, көлөгөҙ, йырлағыҙ, бейегеҙ, уйнағыҙ. Тик уйланмағыҙ. Уйланһағыҙ, ниндәй упҡын ситендә торғанығыҙҙы аңлаясаҡһығыҙ. Был беҙгә кәрәкмәй...

Һәр кем, хатта социаль яҡтан түбән тип танылған кеше лә рухи ихтыяж кисерә. Ошо арҡала уның күңелендә бушлыҡ барлыҡҡа килә. Тик бөтәһе лә эсендәге бушлыҡтың нимәнән килеп сыҡҡанын аңлай алмай. Байлыҡ йыя, күңел аса, иҫерткес эсә, хыялдарға бирелә. Ләкин бушлыҡ тулмай. Сөнки рухи бушлыҡты матди нәмәләр менән тултырып булмай. Күңел һиҙә, күңел эҙләй, ләкин дөрөҫ юлды тапмай. Халыҡты һаҙлыҡтан тигеҙ түшәлгән, яҡшы, лампалар менән яҡтыртылған, ҡағиҙә билдәләре ҡуйылған юлға сығарырға кәрәк.

Был эштә матбуғаттың да роле юҡ түгел. Ул, һис шикһеҙ, үҙенең һүҙен әйтә ала. Еңеллек артынан ҡыуып, кешенең хайуан эстәлеген туйҙырған аҙыҡ ҡына биреү - лайыҡлы эш түгел. Матбуғат яҡтыға йүнәлтергә, яҡшыға өндәргә тейеш. Бары шул саҡта ғына ул еңел холоҡло булыуҙан үҙе лә туҡтап, халыҡты ла еңел холоҡлолоҡтан ҡурсалай ала.

Ләкин был эшкә бик һирәктәр тотона. Сөнки ул тиҙ һөҙөмтә бирмәйәсәк һәм халыҡтың күпселеге тиҙ генә аңламаясаҡ шөғөл. "Киске Өфө" республиканың матбуғат яланында милләттәштәребеҙгә рухи аҙыҡҡа юл күрһәтә алырҙай берҙән-бер баҫма. "Киске Өфө" - кеше уйлап сығарылған виртуаль донъянан ысынбарлыҡҡа ҡайтһын, донъяны тултырған "һары матбуғат" ғәйбәттәренә ышанмаһын, үҙенең булмышы хаҡында уйланһын, бөгөнгө хәлен күрһен һәм ошо нигеҙҙә киләсәккә пландар ҡорһон өсөн бер аҫҡыс ролен үтәүсе.

Беҙҙең заманда кешеләрҙең күпселеге эргәһендә яҡшыға өндәүсе, ярамағанды тыйыусы түгел, ә... ишәк башы ятыуын өҫтөн күрә. Бөгөн ҡиммәттәр матди төҫ алған һәм нәфсе ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә ҡоролған. Ошо арҡала килеп сыҡҡан ҡәнәғәтһеҙлек кешелектең иң ҙур бәләһенә әйләнгән, сөнки бар һуғыштар, аҙғынлыҡ, ярлылыҡ ошо нәфсене ҡәнәғәтләндереү өсөн алып барыла бит. Ләкин бер көн килеп кешелек икенсене аңлаясаҡ. Һуғыштар алып бармайынса ла йәшәп, ғонаһ һаҙлығына батмайынса ял итеп, күңел асып була икәнен аңлаясаҡ. Һәм бөгөн мөһим күренгән алдаҡ идеялар, халыҡтың башын бутаған "йондоҙҙар" тормошо билдәһеҙлеккә батып юғаласаҡ.

...Бер ғалим, халыҡтың ун проценты һәр саҡ яҡшыға әйҙәй, ун проценты һәр саҡ насарға саҡыра, тип әйткән. Был төркөмдәр һәр саҡ булған - юғары әхләҡи нормалар өҫтөнлөк иткән "алтын быуат" дәүерендә лә, упҡынға ҡолаған, аҙғынлыҡ, залимлыҡ хөкөм һөргән заманда ла. Халыҡтың абсолют күпселеге - һикһән проценты һоро масса. Ләкин дәүләт, уның эске һәм тышҡы донъяһы ғына төрлөгә үҙгәреп тора. Яманға өндәүсе төркөм көс йыйғанда, һикһән процент һоро масса улар яғына ауыша - залимлыҡ һәм аҙғынлыҡ өҫкә ҡалҡа. Яҡшыға өндәүсе төркөм көс йыйғанда һикһән процент һоро масса улар яғына ауыша - ғәҙеллек сәскә ата, иң юғары әхләҡи нормалар урынлаша. Беҙ бөгөн ҡайһы заманда йәшәйбеҙ икәнде аңлап торайһығыҙҙыр. Әйҙәгеҙ, яҡшылыҡ яғына ауышайыҡ, яҡшылыҡты яҡлайыҡ! Ошо хаҡта йәштәребеҙ ни уйлай?

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

ЙОНДОҘЛОҒОҢ НИНДӘЙ...

## ЭСКЕ ТОЙҒОМА НЫҒЫРАҠ ЫШАНАМ

Барыҫ йондоҙлоғо аҫтында тыуғандар арыу белмәй, кешегә буйһоноп бармай, тиҙәр. Мин дә бер эшләй башлаһам, кеше бер аҙна эшләгән эште бер көндә урынына еткереп ҡуям. Башҡаларға буйһонмаһам да, холоҡһоҙланып йөрөмәйем, шулай ҙа үҙ фекеремде һәр саҡ яҡларға әҙермен. Тыныс кешемен, мине сығырымдан сығарыу өсөн бик оҙаҡ тырышырға кәрәк. Йондоҙнамәгә яҙылған ҡайһы бер нәмәләр холҡома тап килһә лә, мин күберәк эске тойғома ышанам. Шул тиклем һиҙгерлегем, алдан тойомлау һәләтем көслө, тормошта була торған ваҡиғаларҙы бер нисә көн алда төштә күрәм.

Киләһе йыл миңә 60 йәш тула, тағы ла күберәк эшләргә, күберәк яҙышып ҡалырға ниәтләнеп торам. Йәш саҡта эшләнек тә эшләнек, хатта ял итергә лә ваҡыт табып булманы. Шуға ла Мәскәүҙән ҡайтҡас та көсөмдө ғаиләм өсөн уңайлыҡтар тыуҙырыуға, тормошто ҡулайлаштырыуға тотондом һәм әле шуның менән мәшғүлмен.

*Рәсимә УРАҠСИНА, яҙыусы.*

БЫЛ - ГОНАҺ!



## ЗӘҠӘТ ТҮЛӘМӘҮСЕ

**"Тәүбә" сүрәһенең 34-35-се аяттарында былай тип әйтелә: "Эй, иман килтергән әҙәмдәр! (Кафыр) руханиҙары, ғалимдарының күбеһе әҙәмдәрҙең малдарын хаҡһыҙ юлдар менән ашайҙар һәм уларҙы Аллаһ юлынан яҙҙыралар. Алтын-көмөш йыйып та, Аллаһ юлында сарыф итмәгәндәр арағыҙҙа юҡмы ни? Бына һин шундайҙарҙан "һөйөнсө" ал: уларға хәтәр яза биреләсәк".**

Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Әгәр ҙә дөйә йәки һыйыр, йәки һарыҡҡа эйә булыусы уларға ҡарата тейешлене үтәмәһә, Ҡиәмәт көнөндә ул тигеҙ һәм иркен урынға ултыртыласаҡ. Улар уны тояҡтары менән тапаясаҡ, мөгөҙҙәре менән һөҙәсәк, теш тәре менән өҙгөсләйәсәк. Һәм дөйә көтөүе унының өҫтөнән йөрөйәсәк. Унының өҫтөнән һуңғы дөйә үтеп киткәндән һуң, беренсеһе кире киләсәк һәм был илле меҥ йыл оҙонлоғона тиң булған Ҡиәмәт көнө тамамланғансы дауам итәсәк. Аҙаҡ уға йә ожмахҡа, йә тамуҡҡа юл күрһәтәсәктәр ".

Әбү Бәкер зәкәт түләүҙән баш тартыусылар менән көрәшкән һәм: "Аллаһ менән ант итәм, әгәр ҙә улар миңә Аллаһ илсеһенә (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) биргән кеүек кәзә бәрәсе биреүҙән дә баш тартһа, мин улар менән ошоноң өсөн көрәшәсәкмен!" - тигән.

Ҡөрьәндә "Ғимран" сүрәһенең 180-се аятында: "Аллаһтан ниғмәттәр алып та, һаран булған кешеләр, һаранлығыбыҙ үҙ файҙабыҙға, тип уйламаһындар, кирәһенсә, был (һаранлыҡ) улар өсөн бик тә насар булып сығасаҡ. Һаранлыҡтарына күрә, йыйылған малдары Ҡиәмәт көнөндә уларҙың муйындарына сорналасаҡ. Күктәрҙең, Ерҙең мираҫы - Аллаһтыҡылыр. Аллаһ һеҙ ҡылғандарҙан хәбәрҙарҙыр".

Зәкәт түләүҙән баш тартыусылар тураһында Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) бына нимә ти: "Кем зәкәт түләүҙән баш тарта, мин уның зәкәтенең дә, мөлкәтенең дә яртыһын аласаҡмын. Был Аллаһтың бер хоҡуғылыр".

Әбү Хөрәйрә Аллаһ илсеһенән (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ошоларҙы ишетеүен еткерә:

"Тамуҡҡа беренселәрҙән булып түбәндәге өс төркөм инәсәк:

- Үҙенең халҡын йәберләгән хаким.
- Зәкәт түләргә теләмәгән мөлкәткә эйә булыусы.
- Тәкәббер ярлы".

Абдулғәзиздән Абуль Хафс еткерә: "Һеҙгә намаҙ ҡылырға һәм зәкәт түләргә бойоролдо. Зәкәт түләмәүсенең намаҙы ла юҡ".

**Киләсәккә өмөт һәм ышаныс менән ҡараусы кешене бер һүҙ менән оптимист тип атайҙар. Үҙ киләсәгенә ҡарата бындай мөнәсәбәттә булыр өсөн кеше үҙ-үҙенә, үҙенең мөмкинлектәренә тулыһынса ышанырға тейеш. Тимәк, "Тейһә - тейенгә, теймәһә - ботаҡҡа" йә "Үгеҙ үлһә - ит, арба ватылһа - утын", тип һәр төрлө осраҡлыҡтар иллюзияһында йәшәгән, ағым ыңғайына барған кеше оптимист була алмай. Ә кем үҙ-үҙенә, үҙенең мөмкинлектәренә ышана ала һуң? Әлбиттә, үҙенең кемлеген, ата-олатайҙарының ҡылған ғәмәлдәрен, бөйөк эштәрен, ырыуының шәжәрәһен, халҡының тарихын ныҡлы һәм тәрәндән белгән кеше. Ошондай логика сылбырында ҡарағанда, ниндәй кеше оптимист була ала инде? Әлбиттә, үҙенең шәжәрәһен, халҡының үткәнен яҡшы белгән кеше. Әгәр ҙә ундай кеше башҡаларға йоғонто яһай алырлыҡ һәләттәргә эйә булһа, әйтәйек, шағир йә етәксе булһа, ундай заттарҙы милләттең пассионарийҙары тип әйтәләр. Күренекле шағирә, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, "Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире Фақиһа Ғаҙый ҡыҙы ТУҒЫҘБАЕВАны беҙ ана шундай оптимист итеп беләбеҙ. Әйткәндәй, бусағабыҙҙағы 2010 - Барыҫ йылы ла Фәкиһа Туғыҙбаева йылы. Етмәһә, уға ошо көндәрҙә алтын 60 йәш тула. Меңәрләгән уҡыусыларыбыҙ исеменән уны юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ һәм үҙенә фәлсәфәүи яуаптар талап иткән шундай һорауҙарҙы бирергә ашығабыҙ:**

**- Шағирә ихтыяр көсөн ҡайҙан ала икән?**
**- Тормошоноң иң бәхетле мәлдәре тип ҡайһы миҙгелдәрен атай ала?**
**- Фанилыҡҡа күскән изге йәндәр менән мөнәсәбәте нисек?**
**- Шағирә өсөн бәхет төшөнсәһе ниндәй әһәмиәткә эйә?**
**- Милләтебеҙҙең киләсәгенә ниндәй өмөттәр бағлай, һ. б.**
**Һүҙ - Фәкиһә Ғаҙый ҡыҙына.**

# ХАЛҠЫМ ЙӘШӘГӘНДӘ

## Ихтыяр көсөм - әсәйемдән...

Атайым менән әсәйем, береһенең - тәүге ҡатыны, икенсеһенең тәүге ире үлеп, өйләнешкән саҡтарында атайымдың Зөфәр тигән улы, әсәйемдең Зәкиә һәм Кәфиә исемле ҡыҙҙары булған. Исламморат ҡустым менән икебеҙ уларҙың уртаҡ балаһы булып донъяға килгәнбеҙ. Ҡустым һыу һөлөгө кеүек оҙон буйлы, мыҡты кәүҙәле егет ине. Уның яҙмышы фажиғәле булды. Беҙҙең милләттең ихласлығынан ниндәйҙер шик эҙләгән милләт ҡыҙы менән өйләнешеп, шуларҙың мөхитендә үҙ-үҙен юғалтып, бик сәйер рәүештә вафат булып ҡалды ул. "Ят - ярлыҡамай, үҙеңдеке - үлтермәй", тигән аҡылды аңлап өлгөрмәне Исламморат.

Минә 4 йәш булғанда һуғышта алған яраларынан атайыбыҙ вафат булып ҡалды. Мин уны саҡ-саҡ ҡына хәтерләйем. Хәҙерге Бүздәк районының Ҡаңны-Төркәй ауылы янында элек Бәләкәй Ҡаңны тигән ауыл бар ине. Беҙ шунда тыуҙыҡ, ҙур ҡарағай йортобоҙ бар ине. Әсәйем әйтеүенсә, атайым миңә, ниңәлер, "подружка" тип өндәшер булған. Һуғыштан өйрәнеп ҡайтҡандыр инде ул һүҙҙе. Атайыбыҙ колхозыбыҙҙың беренсе водителе булған, полуторкала йөрөгән. Ауылдаштарын һуғышҡа ла шул машинаһына тейәп алып киткән ул. Беҙҙең район үҙәгенә инеп барғандағы юлда полуторка тора. "Атайыма һәйкәл бына ошо була инде", - тием район үҙәгенә барған һайын.

Атайым Сталинград өсөн һуғышта алған яраларынан 1954 йылда вафат булды. Шул йылдың йәйендә төн уртаһында ҡарағай өйөбөҙ янып китте. Беҙ шыр яланғас тороп ҡалдыҡ та, күршеләрҙә йәшәй башланыҡ. Ҡыш етә башлағас, әсәйебеҙ мунса бураһы әтмәләп, шуны өй итте. Мин шул өйҙә үҫтем. Әсәйебеҙ ауылдың участка дауаханаһында санитарка булып эшләне. Ул уйындағыһын ярып әйтә торған, эсендәге тышында булған тәбиғәт балаһы ине. Кис булһа, ишекте бикләй ҙә, ир-атты өйгә индермәй торғайны. Берәү килһә: "Кем бар унда?" - тип һораша. Әгәр ҙә килеүсе ир-ат енесенән булһа, әсәйебеҙҙең холҡон белгәнгә күрә, яҡын килмәй инде. "Кем бар унда?" - тигән шиғыр яҙырға кәрәк әле миңә.



Бала саҡтан миндә уҡыуға ынтылыш көслө булды. Беренсе класҡа уҡырға барғас, өлкән апайыма: "Апай, мине уҡырға өйрәт инде. Үҙемә тигән кәнфитте һиңә бирәм", - тип әйткәнмен икән. Гел "бишле" гә уҡыным. Үҙемдәге сәмдең, тырышлыҡтың, ихтыяр көсөнөң нигеҙен әсәйемдәндер, тип уйлайым. Атайымдың атаһы Ҡорған йылғаһы янындағы айырым хуторҙа йәшәгән. Хәлле йәшәгән. Уны 1933 йылда кулак тип, мөлкәтен тартып алып, Белорет яғына ебәргәндәр. Унан ҡасып ҡайтҡас, тағы ла ҡулға алып, Өфөгә алып килеп атҡандар. Мөхәммәтвәли ҡартатайымдың туғандары бик уҡымышлы затан булған. Үҙегеҙ беләһегеҙ, ул саҡтағы уҡымышлылыҡтың нигеҙен дини ғилем тәшкил иткән һәм уға беҙҙең атай-олатайҙар фәҡәт тырышлыҡ һәм ихтыяр көсө ярҙамында ирешкән. Миндәге ихтыярҙың бер нигеҙе атайым ҡаны аша ла бирелгән.

Ихтыяр көсө тигәндән, бер парадоксаль күренеш: үкһеҙ етем йә ярым етем үҫкән кешеләрҙең ихтыяр көсө ныҡлыраҡ, улар беше була. Тормош ундайҙарҙы иртәрәк утҡа-һыуға индерә, иртәрәк һәм аяуһыҙыраҡ итеп һынай кеүек. Улай ғына ла түгел, һәр ғаиләнең "ихтыяр" тип аталған вакант урыны булалыр. Ул урынды ғаилә башлығы булған ирҙәр, атайҙар биләргә тейеш. Ә беҙҙең милләттең тарихы шул хаҡта һөйләй: тормош уларға бик аяуһыҙ ҡағылып, яҙмыштарын ҡыйраткас, ихтыяр йөгөн ҡыҙ-ҡатындар йөкләргә мәжбүр булған. Миңә әсәйемдән

## Минең шағирлыҡ ул

күскән ихтыяр көсөнөң асылын мин ошолай итеп тә аңлата алам.

"Һин ҡырыҫһың, ауылдашың Хәким ағай Ғиләжевкә оҡшағанһың", - тип тә әйткәндәре бар миңә. Хәким ағай ҙа, уның Ғабдрахман ҡустыһы ла ниндәй ғорур инеләр. Беҙҙең был асылыбыҙ ырыуыбыҙҙан - ҡаңныларҙан киләлер. Беҙҙең ауылдағы мәктәпте 30-сы йылдарҙа уҡ татарса уҡытырға күсерергә итәләр, әммә ауылдаштарым быға юл ҡуймай, башҡорт мәктәбен һәм башҡорт ауылын һаҡлап алып ҡала.

### Иң бәхетле мәлдәрем

Йәй етһә, ауылыбыҙ эргәһендәге тауға йөрөй торғайныҡ. Яҙғыһын йыуа йыйырға, йәй еләккә барабыҙ. Сәрмәсән йылғаһы ул ваҡытта мул һыулы, тәбиғәт шул тиклем бай, хозур. Әрәмәлектә ниндәй генә йәнлектәр, емеш ҡыуаҡтары юҡ. Беҙ, ҡыҙҙар, ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп, сәхрәлеккә китәбеҙ. Һәр беребеҙҙең күңелдә тик яҡты ғына уйҙар, тик яҡтылыҡ ҡына. Бер ниндәй ҙә проблемалар юҡ, киләсәгебеҙ ҙә шул тәбиғәттең үҙе кеүек, тик гүзәл, яҡты булып ҡына күренә. Янында ғына йырлай-йырлай шишмәләр ағып ята, әкрен генә иҫкән елдәргә ҡайындар шаулай. Бергилке еләк йыябыҙ ҙа, ҡайын төбөнә йәйелешеп ултырып, үҙебеҙ менән алып килгән икмәкте сығарып, икмәккә, еләккә ҡушып шишмә һыуын эсәбеҙ. Шул мәлдәр бала сағымдың иң матур мәлдәре булғандыр, тип уйлайым. Беҙ Зәйтүнә исемле командирыбыҙ етәкселегендә йәй булһа - әремдән, ҡыш ҡарҙан өй яһап уйнай инек. Ниндәй бәхетле инек ул саҡтарҙа.

Мәктәптә уҡығанда республика матбуғатында тәүге шиғырҙарым баҫылған көндәр ҙә шундай уҡ бәхетле мәлдәрем булып күңелемә уйылған. Мин бишенселә уҡығанда шағирҙар Самат Ғәбиҙуллин менән Барый Ноғоманов беҙҙең мәктәпкә уҡытырға килде. Улар асҡан әҙәбиәт түңәрәгенә бар мәктәбебеҙ йөрөнө һәм барыбыҙ ҙа шиғыр яҙа инек. Тотош мәктәп "шағирҙар"ы араһынан һуңынан мин әҙәбиәт донъяһына килдем. Математика уҡытыусым минең математик булыуымды теләгәйне, әммә яҙмышым ошо юлға бороldo. Математиканы яҡшы белеүем поэма яҙғанда ярҙам итә. Ул саҡта беҙҙең мәктәптә башҡорт рухы шул тиклем көслө булды, беҙ хатта урыҫ телен дә башҡортса уҡыныҡ.

Ҡыҙыбыҙ Зөлфиә март айында тыуҙы. Уны миңә имеҙергә алып килделәр. Шул саҡта мин шул тиклем тулҡынландым, үҙемде икенсе кеше итеп хис итә башланым. Ҡыҙым имә башлағас, аңлатып та булмай торған хисемдән илап ебәрҙем. Әсә булараҡ, иң бәхетле мәлем шулдыр ул, тип уйлайым.

Бәхетһеҙлектәрем дә юҡ түгел, әммә улар минән йә ғаиләмдән килгән бәхетһеҙлектәр түгел, ил яҙмышының сағылышылыр. Нормаль илдә йәшәгән кешенең яҙмышы улай булмай. Киләсәктә ошолар хаҡында автобиографик повесть йә роман яҙырға ниәтем бар. Уның тәүге бер бүлеге әсәйемә бағышланасаҡ.

***Беҙ, ижад кешеләре, милләтебеҙ яҙмышына бер нисек тә битараф була алмайбыҙ. Битараф булһаҡ, ижадсы була алмайбыҙ. "Ергә хужа - өйгә хужа", - тиҙәр. Шуның өсөн дә беҙҙең өсөн иң мөһиме - еребеҙҙе һаҡлау. Әгәр ҙә еребеҙҙән яҙһаҡ, беҙҙе бер ниндәй идея ла, дәүләтселек тә һаҡлап ҡала алмаясаҡ. Үкенескә ҡаршы, беҙҙең халыҡ әлеге тормошҡа яраҡлаша алмай һаман да. Ерһеҙ дәүләтте күҙ алдына килтереп булмай. Шул уҡ ваҡытта "дәүләт" һүҙе байлыҡ тигәнде аңлата һәм беҙҙең иң ҙур байлығыбыҙ - еребеҙ. Тимәк, беҙҙең дәүләтебеҙ - еребеҙ, дәүләтселек һәм ер төшөнсәләре беҙҙең өсөн бер үк мәғәнәгә эйә. Икенсе дәүләтебеҙ - рухыбыҙ. "Халҡым йәшәгәндә ер йөҙөндә, минең шағирлыҡ ул - сәйәсәт", - тип әйткәйнем "Сәйәсәт" тигән шиғырымда.***

**✓ Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Динис Бүләков беҙгә бер өҫтәл бүләк итте. Шул өҫтәлде Флорид Бүләков, Мәүлит Ямалетдинов, Рауил Ниғмәтуллин дүртәүләп урам буйлап күтәреп алып килдек.**

# ЕР ЙӨҘӨНДӘ,

## - сәйәсәт…

### Рухи туғандарым

Тормошомда һәр ваҡыт минең күңелемде үҫтереүсе, ижадсы булараҡ, киләсәгемде яҡты итеп күреүсе яҡшы кешеләр осрап торҙо. Мин уларҙы рухи туғандарыма тиңләйем. Улар баҡыйлыҡҡа күскәс, тормошомдоң бер өлөшө лә шунда күсә кеүек. Тәүге шиғырҙарымды яҙырға өйрәткән уҡытыусым Самат ағай Ғәбиҙуллиндың нисек итеп мине таҡтаға сығарып һөйләткәнен хәтерләйем. Университетҡа барғас, Марат Минһажетдинов Рәми ағай һымаҡ милли рухлы ҙур кеше булды. Ул Һәҙиә Дәүләтшина тураһында һөйләгәндә, күҙҙәре йәшкәҙәп китә ине. Ул миңә Һәҙиә Дәүләтшина тураһындағы китабына: "Факиһа, һин, һәр ваҡыттағыса, ғорур һәм аҡыллы булып ҡал!" - тигән һүҙҙәрен яҙып бүләк итте. Мин өсөнсө курсты бөтөп, ауылға каникулға ҡайтҡайным, Рәми ағай Ғариповтан: "Факиһа, тиҙ генә "Башҡортостан ҡыҙы"на эшкә кил!" - тигән телеграмма килеп төштө. Мин унда Рәми ағай менән ярты йыл эшләп алдым. Быға тиклем беренсе курста уҡығанда Рәми ағай тәүге шиғыр шәлкемемде журналда ҙур итеп сығарғайны.

Булат ағай Рафиҡов минең бөтә шиғырҙарымды һәм поэмаларымды уҡып, үҙ ваҡытында фекерҙәрен әйтә барҙы. Бер мәл бик ҡаты ауырып китеп, бер поэма яҙып, Булат ағайға биргәйнем, ул миңә: "Факиһа, был поэма түгел бит", - тине. Ул әгәр ҙә минең үҫеүемдә теләмәнә, ижадыма өмөт бағламаһа, был һүҙҙәрҙе әйтмәй генә, һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырып, маҡтар ине.

Заманында Яҙыусылар союзының йәштәр менән эшләү комиссияһы рәйесе булған билдәле яҙыусы Рәшит ағай Солтангәрәев менән беҙ дуҫ инек. 1970 йылда минең ҡулъяҙмамды тикшерҙеләр. Мостай Кәрим менән "Аҡбуҙат" журналы аша дуҫлаштыҡ. Ул беҙҙең журналда балалар өсөн хикәйәләрен баҫтырҙы. Зәйнәб апай Бейешева ла миңә шылтыратып торҙо. Динә Талхина менән рухташ булдыҡ. Мин уның рух көсөнә, бик ҡаты ауырыуға дусар булып та, шундайын оптимистик рухтағы әҫәрҙәр ижад итеүенә һоҡлана инем. "Пионер" журналында Динис ағай Бүләков менән бергә эшләнек. Ул миңә ышанып ҡараны һәм үҙемдә лә шундай уҡ кешеләргә ышаныу тойғоһо булдырырға ярҙам итте. Йомарт, ихлас булды Динис ағай.

Нисектер, бына ошондай шәхестәрҙең күбеһе донъялыҡтан бик иртә китә кеүек. Улар киткәндән һуң күңелдә оло бушлыҡ тороп ҡала.

### Дәүләтебеҙ - еребеҙ

Хәҙер инде йәшәүгә, тормошҡа фәлсәфәүи күҙлектән ҡарар йәштәмен. Тәбиғәттең бәләкәй генә бер өлөшө булған кеше "үҙ-үҙемә хужамын", - тип йөрөй бит инде. Ә бит ысынында беҙ оло ғаләмдең бәләкәс кенә бер өлөшсәһе һәм ошо донъяла йәшәүебеҙ менән бәхетлебеҙ. Ҡалғаны барыһы ла ваҡлыҡтың да ваҡлығы. Ә инде ижад кешеһенә ошо бәхетле мәлде мәңгелек йылъяҙмаһына яҙырлыҡ ҡөҙрәт бирелә. Бына шуның өсөн ижад кешеләре икеләтә бәхетле.

Беҙ, ижад кешеләре, милләтебеҙ яҙмышына бер нисек тә битараф була алмайбыҙ. Битараф булһаҡ, ижадсы була алмайбыҙ. "Ергә хужа - өйгә хужа", - тиҙәр. Шуның өсөн дә беҙҙең өсөн иң мөһиме - еребеҙҙе һаҡлау. Әгәр ҙә еребеҙҙән яҙһаҡ, беҙҙе бер ниндәй идея ла, дәүләтселек тә һаҡлап ҡала алмаясаҡ. Үкенескә ҡаршы, беҙҙең халыҡ әлеге тормошҡа яраҡлаша алмай һаман да. Ерһеҙ дәүләтте күҙ алдына килтереп булмай. Шул уҡ ваҡытта "дәүләт" һүҙе байлыҡ тигәнде аңлата һәм беҙҙең иң ҙур байлығыбыҙ - еребеҙ. Тимәк, беҙҙең дәүләтебеҙ - еребеҙ, дәүләтселек һәм ер төшөнсәләре беҙҙең өсөн бер үк мәғәнәгә эйә. Икенсе дәүләтебеҙ - рухыбыҙ. "Халҡым йәшәгәндә ер йөҙөндә, минең шағирлыҡ ул - сәйәсәт", - тип әйткәйнем "Сәйәсәт" тигән шиғырымда. Беҙ, ысынлап та, америкалылар, европалылар, иң күп һанлы рәсәйлеләр кеүек, тик көндәлек ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү: ашау-эсеү, яҡшы кейенеү, матур йорттарҙа йәшәү, һуңғы маркалы машиналарҙа йөрөү маҡсаты менән генә йәшәй алмайбыҙ. Беҙ тыуғандан үлгәнсегә тиклем милләт идеяһы менән йәшәүгә дусар ителгәнбеҙ. Йәшәүебеҙҙең маҡсаты - ошо, бүтәнсә йәшәй алһаҡ та, шулай йәшәргә тейешбеҙ. Киреһенсә булған осраҡта, милләтебеҙҙән ҡолаҡ ҡағабыҙ. Ошолай йәшәүебеҙ менән беҙ барыбер бәхетлебеҙ.

Президент һайлауҙары икенсе турға ҡалғас, Мирас Иҙелбаевтың Салауат Юлаев хаҡындағы "Ағиҙел"дә баҫылған мәҡәләһе ҡулыма килеп эләкте. Унда Салауатты атаһы менән Башҡортостандан алып Рогервикҡа тиклем нисек алып барыуҙары бәйән ителә. Уҡыным да, бүлмәнән бүлмәгә йөрөп түгелеп илайым. Ярһып бөттөм, туктай алмайым. Бына шундай инде миндә ил тойғоһо.

### Үҙгәрештәр Хәйбулла миҫалында…

Ельциндың: "Суверенитетты күпме йота алаһығыҙ, шунса алығыҙ", - тип әйткәненән алып Путиндың власть вертикаленә тиклем осорҙа беҙ күтәрелеп ҡалдыҡ. Совет осоронда етмеш йыл эшләнмәгәнде ике тиҫтә йылда башҡарып сыға алдыҡ. Иң мөһиме - бер нисә быуын милли кадрҙар әҙерләп өлгөрҙөк. Шулай ҙа сәйәсәт, иҡтисад, финанс өлкәһендә артабан да кадрҙар әҙерләүгә етди иғтибар бирелеү зарурлығы көн кеүек асыҡ. Совет осоронда, мәҫәлән, "Аҡбуҙат" журналын сығарыу өсөн Мәскәүҙән рөхсәт алырға кәрәк ине. Беҙ Мәскәүҙән рөхсәт алып торманыҡ. "Агитатор блокноты" журналын ябыҡ та, шуның урынына "Аҡбуҙат"ты сығара башланыҡ. Тәүге осорҙа еңеллән булманы. Аҡсабыҙ булһа ла, журналды баҫырға ҡағыҙ, хатта редакциябыҙҙың мебеле лә булманы. Офисыбыҙ Красин урамындағы "Социнвестбанк" бинаһында ине. Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Динис Бүләков беҙгә бер өҫтәл бүләк итте. Шул өҫтәлде яҙыусылар союзынан Флорид Бүләков, Мәүлит Ямалетдинов, Рауил Ниғмәтуллин дүртәүләп урам буйлап күтәреп алып килдек. Алып килдек, ултырттыҡ, башҡа бер ниндәй ҙә мебель юҡ. Минең тәүге мөхәррир өҫтәлем ана шулай килде редакцияға. Бер үҙем булһам да, тәүҙә үк 22 мең тираж йыйҙым. Халҡыбыҙ туған телгә шул тиклем һыуһағайны. Тәүге һанды сығарырға ҡағыҙ юллап, Хөкүмәтебеҙ Премьер-министры урынбаҫары Мансур Әнүәр улы Әйүповҡа барҙым. Ул тәүге һанға "Башҡортостан" нәшриәте директоры А.И. Безрукавниковтан ҡағыҙ алып торҙо. Икенсе һанға ул саҡтағы "Китап" нәшриәте директоры Аҫылғужа Баһумановтан алып торҙоҡ. Артабан Зарема Әхмәтйәнованың урында эшләгән туғандары арҡаһында журнал йәшәүен дауам итте. Әлегә тиклем Өфөлә һәм республикабыҙҙа нимәләр генә төҙөлмәне, ниндәй генә гәзит-журналдар сыға башламаны.

Ошо йылдар эсендә республикабыҙҙа ниндәй үҙгәрештәр булғанын бер Хәйбулла районына ғына ҡарап белә алабыҙ. Мин был районға килен булып төшөрҙән алда студент саҡта фольклор экспедицияһына барҙым. Аҡъярға "кукуруз" самолетта килеп төштөк. Шул тиклем ныҡ һелкетә, баш әйләнә, әммә унда барырға бүтән юл юҡ. Барып төшкәс тә, мине самолеттан сығарҙылар ҙа, далаға һуҙып һалдылар. Саҡ мандыным. Аҡъяр менән тәүге тапҡыр танышыуым шул булды. Саман өйҙәр, ихаталары ла тәҙәк түгел, юлдар юҡ, әммә халҡы шул тиклем ихлас, ҡунаҡсыл. Икенсе тапҡыр инде унда "Башҡортостан пионеры"нда эшләгәндә командировкаға барҙым. Ул саҡта буласаҡ ирем Мансур район комсомол комитетында эшләй ине. Шунда таныштыҡ.

Шул саҡтарҙан алып Хәйбуллала күҙ күреп ышанмаҫлыҡ үҙгәрештәр булды. Юлдар һалынды, һәр бер ауылға, һәр өйгә зәңгәр яғыулыҡ килде. Күптәр, бигерәк тә йәштәр был үҙгәрештәрҙең әһәмиәтен аңлап та бөтмәйҙәр. Әммә быларҙың барыһы ла минең күҙ алдымда булды һәм Хәйбуллалағы үҙгәрештәр республика етәкселегенең башҡорт ауылына мөнәсәбәте үҙгәреүенең яҡшы күрһәткесе. Мәҫәлән, совет осоронда башҡорт ауылына мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе төрлө булды.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

### *Фәлсәфә*

Миндә хәҙер сәскә фәлсәфәһе,
Үҫкем килә, орлоҡ ҡалдырғым,
Һыу-һауанан килә, тупрағымдан
Йәшәү таңһығымды ҡандырғым;

Миндә хәҙер йылға фәлсәфәһе,
Алға ғына аҡһын уйҙарым.
Һыуҙың төбөндәге таштар кеүек,
Иҫтәлектә ҡалһын моң-зарым;

Миндә хәҙер тауҙар фәлсәфәһе,
Ер тетрәнә - бәлки, ауырмын,
Ергенәмдең ете ҡатына ла
Сат йәбешкән йәшәү тамырым.

### *Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто…*

Шығырым тулы оло залда, йөрәкһенеп,
Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто.
Йәш-елкенсәк күрәләтә сығып китте,
Һөйләй, тиҙәр, шағир апай бушты-юҡты.

Арттарынан шап ябылған ҡалын ишек
Бикләр микән инде беҙҙең арабыҙҙы?
Эй, ҡөҙрәтле ил инәһе! Әйт һүҙеңде!
Кире борсо,
Уйландырып бынау уйһыҙ балаларҙы!

Эй, хөрмәтле, ил ағаһы! Ҡайҙа һуң һин?
Әйтсе бер һүҙ! Оран булһын бүтәндәргә -
Иленән дә, теленән дә, көнөнән дә
Ваздар кисеп, күктән бәхет көткәндәргә.

Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто,
Эй, киленем! Ҡеүәт бирсе һүҙҙәремә.
Әйтсе бер һүҙ, йәндәремде минең аңлап,
Алдарында мин әҙермен теҙләнергә.

Эй, туғаным! Телһеҙҙәр бит балаларың...
Әйтә алмай: ҡайҙа яҡшы, ҡайҙа ялған.
Көн итеүсе үҙ тамағын уйлап ҡына
Кешеме ни? Ул - ҡурҡыныс, ул бит - яман!

Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто
Тыуып үҫкән ерҙәрендә Салауаттың.
Тыумаҫ микән йорт-еремдә яңы батыр
Яңыртырға Салауаттың аманатын?

Эҙләһәм дә таба алмам халҡым рухын
Араһынан бейек-бейек таш йорттарҙың.
Йәнебеҙгә нисек итеп ҡайтарайыҡ,
Башҡортлоҡто ҡайтарайыҡ, башҡорттарым!

### *Ул ҡояшҡа китеп бара ине…*

*Рәми Ғариповҡа*

Ул ҡояшҡа китеп бара ине,
"Имеш, берәү - донъя күсәре,
Батшаларға баш бирмәгән була",-
Ярандарҙың ташты үстәре.

Йырлай-йырлай атлауында булды,
Арттан килеп аяҡ салдылар.
Үҙ-үҙеңдән баш тарт!
Идеалдарын
Ҡорбан байрамында салдылар.

Ни тамаша? Ниндәй ҡыҙыҡ унда?
Иҫ китерлек тағы ни ҡупҡан?
Ҡояшына китеп барған саҡта
Батырғандар ергә тубыҡтан.

Буйһонманы! Һынды...
Һуңғы тапҡыр
Ҡулын юғарыға ул һондо:
Дошмандары дуҫҡа әйләнделәр,
Бары ҡояш уны юҡһынды...
Ул ҡояшҡа китеп бара ине...

* * *

Хоҙай мине мөһөрләгән,
Мөһөрөм минең - башҡорт,
Күрмәгәндәр ҙә күрәләр:
Мөһөрөм тора балҡып!

Хоҙай мине ололаған,
Дәрәжәм минең - башҡорт,
Башҡортлоҡто һаман асам,
Бөтөралмайым асып.

Бөтөрөрлөк түгел асып:
Ергә йәштәш башҡорт мин,
Яңы баштан уйлай башым:
Ергә йәндәш башҡорт мин!

Хоҙай мине бик яратҡан,
Ер күсәре - Уралым,
Ер әйләнә, - ә күсәрен
Мин бит тотоп торамын!

Хоҙайҙың мин үҙ балаһы,
Иманым минең - башҡорт!
Ер менән күкте бәйләйем,
Урал тауына ашып.

***✓ Оло ҡорһаҡлы эшҡыуар ҡапыл ғына байымаҡ булды. Нимә ҡырын ята, шуны уңға-һулға һата башланы. База урамында ятҡан кәрәк-яраҡ түгел, тракторҙарҙың, хатта эшләп торған станоктарҙың еҫе лә ҡалманы.***






Туйҙан һуң да килендәре бер кемдән йәшенмәне, ситләшмәне, ипле генә йылмайып, өй эштәрен үҙалдына эшләп тик йөрөнө: өйҙө йыйыштырҙы, ҡашығаяҡ йыуҙы, өҫтәлгә йыйышты. Ни тиһәң дә, таҫма теләнеп йә төҫ-башын уйнаҡлатып йөрөй торғандарҙан түгел икәнен белделәр, әҙергә-бәҙер булып ултырмауын оҡшаттылар. Эшләйем тигәненән тыймаһылар, тегене-быны эшләргә лә ҡушманылар, үҙ белдеге менән атҡарғанынан да донъя көтөргә һәләтле икәнен күреп ҡәнәғәт инеләр. Тыйнаҡ, әрһеҙ, егәрле, нимәгә тотонһа ла ҡулдары килешеп тора, хәрәкәттәре йылдам, һәр нәмәне урынына еткереп эшләргә тырышыуы ҡыуандырҙы ҡайны-ҡәйнәһен.

-Ярай, сабыр-рахман! Һәр нәмәнең үҙ мәле бар. Үҙҙәре бер-береһен ҡәҙерләп, хәстәрләп матур, татыу йәшәһәләр була...

Ата-әсәһе ғәзиз балаларына ошонан да һәйбәт тағы ниндәй изге теләктәр теләһен. Яңы урынлашҡан ерҙәренә ҡайтҡас, тулы ғаилә тормошо менән йәшәп киттеләр. Октябрь айында беренсе улдары тыуҙы. Ҡыуаныстарын әйтеп тораһы ла юҡ! Өндәшергә йәтеш, матур яңғыраған исем ҡуштылар. Айҙар бер тында тотҡарлыҡһыҙ ғына әйтелә. Хәҙер улдары әсәһен матур һөйләшергә өйрәтер: икәүләп һөйләшергә өйрәнәсәктәр бит, ә икәү бергә гел еңелерәк. Гүзәл улына "Айым" йә "Ай" тип кенә иркәләп өндәште. Үҙенә күрә бәләкәй генә хәйләһе лә булғандыр инде, сөнки "Ай" тип әйтеүе күпкә еңелерәк бит. Бәпәйҙәре тыуғас, Батыр мәктәптә уҡып йөрөгән сағында тәбиғәт күренешен һүрәтләгән рәсеменә бер айыу балаһын өҫтәп төшөрөп ҡуйҙы.

- Ә ҡыҙыбыҙ тыуһа-а-а? - Гүзәл үпкәләгән кеше кеүек иламһырап әйткәндәй тойолдо.

- Ә-ә-ә! Ҡыҙыбыҙ булһа-а-а, ҡыҙыбыҙ тыуһа, аҡланға болан балаһы төшөрөрмөн! Барамы? - Гүзәлен ҡосағында иркәләтеп йыуатты.

- Эй-й-йе-е, матур булыр.

- Матурлыҡҡа матур булыр ҙа ул, кәләшкәйем, ә икеһенә ике ерҙә япа-яңғыҙҙарына күңелһеҙ булмаҫмы икән?

- Әллә-ә-се...

- Әллә-мәлләһе юҡ инде хәҙер, бәпәйем! Үҙең болан балаһы һораның, уларға яңғыҙҙарына күңелһеҙ булмаһын өсөн, исмаһам, икешәр булыуҙарына ризалашмай хәлең юҡ!

- Яра-а-ай, - тигән булды кәләше үҙе болан балаһы кеүек иркәләнеп.

Хәҙер ул рәсемдә ике айыу балаһы йәнәшә тороп еләк сүпләйҙәр, өс болан балаһы аҡланда күбәләктәр менән баҫтырышып уйнаҡлап йөрөйҙәр. Айҙарҙан һуң тыуған ҡыҙҙарына Айгөл тип исем ҡуштылар, Айгөлдөң һеңлеһенә өс ижектән торған Айһылыу исемен ҡуштылар, Гүзәл өсөнсө ҡыҙҙарына ла үҙенә әйтер өсөн еңелерәк исем ҡушайыҡ тип юхалап маташҡайны, Батыр, анһатҡа һалышма тип, ҡыҙына Таңһылыу исемен ҡуштырҙы. Һуҙынҡы өндәрҙе ҡәҙимге матур өндәшергә күптән өйрәнгән Гүзәлгә тартынҡы өндәрҙе лә һәйбәтерәк әйтергә тырыштырыуға ишара ине был сара. Малайҙары тыуғайны, шул уҡ маҡсатта, уға ла тартынҡы өнлө, ҡаты ижекле Айрат исемен ҡуштырҙылар. Ысынлап та, сараһыҙҙан тигән кеүек, Гүзәл балаларының исемен тырышып-тырышып матур әйтергә өйрәнде. Тыуған бер бәпесенең теле асылғанса тиклем уның исемен дөрөҫ әйтә башланы. Балаларын да һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе асыҡ, матур әйтеп һөйләшергә өйрәттеләр. Аллаға шөкөр, өлкән улдары Айҙарға етәһе балаларына әсәләренең тел көрмәлеү шауҡымы йоҡмаһы. Айҙар улдары ғына ят урында, күмәк кешеләр араһында һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә тотлоҡто. Тотлоҡманы ла тигәндәй, әҙерәк һуҙынҡырап һөйләне. Үҙҙәрен бөтә яҡтан камил тип, башҡаларҙан етешһеҙлек эҙләүсе миһырбанһыҙҙар, әлбиттә, һиҙҙеләр. Алсаҡ күңелле мәрхәмәтле йәндәр, киреһенсә, ҡайһылай үҙенсәлекле йомшаҡ, матур һөйләшә был бала, тип һоҡландылар.

* * *

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, донъялар болғанмай тормай. Тормош үҙгәреүсән. Бер быуын ғүмере лә тыныс-имен тормошта, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙа үтмәйҙер. Һәр замананың үҙ һынауҙары, үҙ һынамыштары, үҙ һәләкәттәре ҡубып ҡына тора. Был осорҙа ла төрлө милләтле халҡы имен-аман тормошта йәшәп ятҡан илдең йөҙөн үҙгәртеп ҡороусылар күбәйеп китте. Үҙгәртеп ҡороу ҡойононоң йылғыр ҡойроғо ҡағылмаған йәшәү, эшмәкәрлек өлкәһе ҡалмағандыр. Зәһәр зәхмәте халыҡтың йәшәйешен үҙгәртеү генә түгел, сәнәғәт, сәнғәт, мәҙәниәт, хатта аңдың быуаттар буйы ҡаҡшамаҫ тип уйлаған нигеҙҙәрен тарҡатты. Камиллаштырабыҙ, тигән булып, яҡшы ғына эшләп ултырған сәнәғәт предприятиеларын туҙҙырҙылар. Киң тормоштоң төрлө даирәләрендә аң менән аңламаҫлыҡ, йән менән килешмәҫлек сәйер, шиҡәйәтле хәлдәр тыуҙы. Урам буйҙарында ығы-зығы ҡупты, телевизорҙан бер-береһенә һөсләшеп, өрөштөләр, ороштолар, һөрәнләштеләр. Кем кемгә ҡаршы, кем кеме яҡлы икәнен дә айырып булманы. Кешеләр бер-береһен ишетмәгәс, нисек аңлашһындар? Һәр кем был афәттән үҙен, ғаиләһен аялау юлдарын эҙләне, сөнки хөкүмәткә ышаныс төрлө кимәлдәге хакимиәттең ғәмһеҙ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә тамырынан ҡоротолдо. Үҙенде үҙең ҡайғыртмаһаң, һинең ғүмерең һуҡыр бер тин тормай! Үҙгәртеп ҡороу һәйбәт нәмә булһа, әүәлдән кеше дошманына, "Балаларыңа үҙгәртеп ҡороу заманында йәшәргә яҙһын!" - тип үсәмәҫ ине...

Батыр ҙа был буталсыҡ, болғаҡ заманда ғаиләһе менән туғандары араһында йәшәүҙе хуп күрҙе. Ят ерҙә япа-яңғыҙ ҡаңғырғанға ҡарағанда, үҙ туғандарың менән бергә-бергә йәшәү хәйерлерәк. Быға тиклем дә үҙҙәренең ауылындағы лесхозға эшкә ҡайтырға ҡоҙалайҙар ине, үҙенән-үҙе уңайы килеп сыҡҡас, тәүәкәлләне. Белеме бар, һөнәре буйынса ҡәҙимге эш тәжрибәһе туплап өлгөрҙө, етәкселәре тәртибен, эште ойоштороу һәләтен ыңғай баһалайҙар, күптән яуаплыраҡ эш бирергә була был тырыш, әрһеҙ егеткә, тигән фекер бар ине. Кинйә ир балаға атай, әсәйен ҡарарға ҡасандыр барыбер тыуған яҡҡа ҡайтыр мәле етәсәк, ниңә килеп тыуған уңайлыҡтан файҙаланмаҫҡа? Күсенеп ҡайтып киттеләр. Иркенен йәйлап үҙең төҙөп алырһың, тип, әҙер фатир бирҙеләр. Үҙ ереңә файҙа килтереп, үҙ туғандарың менән аралашып, дуҫтарың менән ҡатнашып, эштә, тормошта яҡташтарыңдың ихтирамын яулап йәшәүгә ни етә! Ваҡытында дөрөҫ баһаланған уңыштар әҙәм балаһына рухи ҡәнәғәтләнеү, йәненә дәрт бирә, күңелен байыҡтыра. Күңел байлығы әҙәм йәнен яҡлай, һаҡлай, ә матди байлыҡ һәр ваҡыт үҙе һаҡлауға мохтаж. Матди байлыҡ, мөлкәт йыйып йәшәү маҡсаты атаны улдан, туғанды туғандан айыра! Батыр артыҡ күп булмаған ғүмерендә ошо тәғлимәтте аңы менән асыҡлап, йәне менән үҙләштереп өлгөргәйне инде.

Яңы урында эш шарттары менән яҡындан танышҡас, һәр ваҡыттағыса, бөтә белемен, һәләтен, тәжрибәһен егеп эшкә кереште. Үҙе һәр нәмәне урын ерenә еткереп атҡарырға өйрәнгән Батыр башҡаларҙан да шуны талап итә. Эшселәргә мөнәсәбәте һәйбәт булғас, үҙен дә ихтирам итәләр. Быға тиклем әллә күпме бер-бер артлы алмашынып торған етәкселәрҙән таланып хәлһеҙләнеп, киләсәккә яҡты өмөттәрен юғалтҡан урмансылыҡ тармағын яңынан ныҡлы аяҡҡа баҫтырып, уңышлы ғына эшләп китеүгә өлгәштеләр. Яңы етәксегә, донъясыл хужаға, ауылдаштары ышаныс менән ҡарай. Ҡолаҡса менән хәлдәр ҡатмарланған мәлдә ярҙамсыл хужалыҡ тармаҡтарын киңәйтеүгә ирештеләр. Йылҡысылыҡ, сусҡасылыҡ, умартасылыҡты үрсетеүгә төп хужалыҡ тармағы менән бер тигеҙ әһәмиәт бирҙеләр. Колхоздың ташландыҡ ерҙәрен үлән сәсеп тергеҙеп, буш ятҡан баҫыуҙарында үҙ малдарына аҙыҡ әҙерләү, эшсе халыҡ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн бойҙай, арыш, арпа сәстеләр.

Аллаға шөкөр! Тормош яңынан яйланып бара түгелме, шайтан алғыры? тип, ауылдаштары ҡыуана. Колхоз тарҡалғас, башҡа эшләр урын да юҡ ауыл халҡына. Хәҙер бөтә өмөттәре шул терелеп килгән лесхозда.

Ҡана һуң ысынлап та бөтәһе лә шулай барһа! Булмаһа ярар ине! Терелеп килгән йәмғиәткә әлеге лә баяғы әүҙем үҙгәртеп ҡороусы эшем эйәләре тығыла башланы. Аҡшайған күҙҙәрен төбәү генә түгел, ҡулдарын да һуҙалар. Һуҙа инде, эшсе кешеләрҙең хоҡуҡтарын яҡлап, ҡомһоҙ ҡулдарҙы шаҡарыусы булмағас. Эйе, үҙгәртеп ҡороу ҡойононоң тәүге шауҡымы урман төбөнә лә йәһәт килеп етеп, донъяның аҫтын өҫкә әйләндереп, кешеләрҙе ғәжәпләндереп үтеп киткәйне. Ябай кешеләр шулай тип уйлап ныҡ яңылышҡандар икән. Тәүге тулҡыны ыштан, күлдәктәрен һалдырып алғайны, икенсе тулҡыны бигерәк тә яһил булды. Диңгеҙҙә лә шулай тиҙәр бит: тәүге тулҡын көслө булһа ла, ул тиклем һәләкәт килтермәй, ә артынан етә килгәне ҡот осҡос ҡыйратыу көсөнә эйә була икән.

Ғөмүмән, үҙ эшен урынына еткереп яуаплы атҡарырға өйрәнгән эш кешеһе башҡаларҙы ла атҡарған вазифаһына үҙе һымаҡ намыҫлы, яуаплы ҡарай тип уйланы. Шулай булмаһа, нисек үҙ ҡулдары, үҙ көсө менән ҡорған, төҙөгән, етештергән мөлкәтен аяуһыҙ талауға юл ҡуйһын? Ризалыҡ, рөхсәт һорап та, кәңәшләшеп тә тормайынса, иң тәүҙә эшмәкәрлектәрен камиллаштырыу өсөн ярҙамсыл хужалыҡтарҙы бер урынға туплайбыҙ тигән һылтау менән бер өйөр аттарҙы ҡыуып алып киттеләр, сусҡаларҙы һуйып ташынылар, умарталарҙың да сираты етте, бер бөртөгөн дә ҡалдырманылар. Бәрәкәтле ерҙә үҙҙәренеке кеүек күреп хәстәрләү, ҡәҙерләп үрсетеү һөҙөмтәһендә йылдар буйы йыйған мөлкәт күҙ йомоп асҡан арала юҡҡа сыҡты. Үҙҙәре эшләп тапҡан килем сығанаҡтарына үрсетелгән мал, ҡорттарҙы яҡлап, аралап сығыр кешө лә, көс тә табылманы.

Йылғыр ҡойон һымаҡ юлындағы бар нәмәне ялмап, йотоп килгән үҙгәртеп ҡороу касафаты, дөмөгөү түгел, яңынан көс йыйған кеүек, хәҙер инде икенсе тапҡыр тештәрен ыржайтып, шүрәленеке һымаҡ оҙон бармаҡтарын һуҙып, соҡоп, ҡытыҡлап рәтле эшләргә форсат бирмәне. Унан да килеп һауҙылар, бынан да килеп таланылар, көпә-көндөҙ терелә́й һуйҙылар. Уларҙан ҡурҡып, өркөп йәки йәш килен һымаҡ итәктәрендә ҡымтып тик ултырһаң, эш бармай. Эш эшләйем тип ҡыбырлаһаң, ҡаҡ түбәгә һуғырға әҙер тороусы пүнәтәйҙәр үрсене. Барыһын да йүгереп йөрөп үҙеңә йүнләргә кәрәк. Тығылдылар, ҡыҫылдылар, тыйҙылар, туймаһылар! Юҡ!

Алған, һатҡан тауарҙарынан һуҡыр бер тин аҡса килмәне. Эшмәкәрлекте боронғо батраклыҡҡа, эшселәрҙе ары-бире астан үлмәҫлек ризыҡ өсөн эшләтеүгә күсерҙеләр. Тырышып эшләү һөҙөмтәләренән үҙҙәренә йүнле эш хаҡы ла, лайыҡлы хөрмәт тә тәтемәгәс, эшкә илкеһәлҡы ҡараусылар ишәйҙе, шунан урлашырға, эшкәрткән материалдарын йәшерен-мәшерен араҡыға, тәмәкегә алмаштырырға өйрәнделәр. Батыр барыһын да күрҙе, күреүен, ҡаршы сығып оялтып, әрләп тә ҡараны, ләкин эш кешеһе үҙ хеҙмәтенең емешен татый алмағас, нисек намыҫланып торһон? Эстән генә ауыр кисерһә лә йомшаҡлыҡ күрһәтте шул. Ҡапыл ныҒыраҡ тыйыр кәрәк ине. Һаман да шул кешелеклегенең касафаты. Башҡаларҙы ла үҙе кеүек күреп өйрәнгән: уларҙың да намыҫы, яуаплылығы, ояты бар, ҡасан булһа ла уянырҙар, оялырҙар, тип уйланы. Ышанды! Ғәйепте үҙенән дә күрҙе: ваҡытында лайыҡлы эш хаҡы түләй алмағас, улар ғаиләләрен хәстәрләй бит, тигән булып, үҙен йыуатты. Әҙерәк булышырҙар ҙа ҡуйырҙар, тип өндәшмәй йөрөгән һайын шаштылар, хәҙер ҡаршы һүҙҙе тыңлау түгел, ҡолаҡтарына ла элмәйҙәр, бөтә эшселәре тигәндәй, үҙенең ҡул аҫтындағыһы менән алыш-биреш эшләп, үҙен тәьмин итеү ысулына күсте.

Улай ғына булһа, бер хәл! Мәскәй ҡойондоң икенсе тулҡыны шәп-шәрә, ауыҙҙарын асһа, үпкәләре күренер хәлдә ҡалдырҙы. Күҙ терәп торған төп ағас материалдары эшкәртеү базаһын, шәхси ҡулда яҡшыраҡ эшләйәсәк тип, эшселәре, ҡорамалдары, техникаһы менән эшҡыуарға тутыҡҡан сөй хаҡына "һаттылар". Һеҙҙең хәлегеҙҙә бер нәмә лә үҙгәрмәй, быға тиклем нисек эшләгәнһегеҙ, шулай эшләйәсәкһегеҙ, ниндәй эш хаҡы алғанһығыҙ, шулай уҡ аласаҡһығыҙ тип, эшселәрҙе алдаштырҙылар. Тиҙҙән бөтәгеҙ ҙә байып, ғаиләләрегеҙ менән сит илдәргә сәйәхәткә йөрөй башларһығыҙ, бөтәгеҙ ҙә бай мөлкәткә эйә булырһығыҙ, имеш... Оло ҡорһаҡлы эшҡыуар ҡапыл ғына байымаҡ булды. Нимә ҡырын ята, шуны уңға-һулға һата башланы. База урамында ятҡан кәрәк-ярак, тимер-томор түгел, машиналар, тракторҙарҙың, хатта ҡайһы бер эшләп торған станоктарҙың еҫе лә ҡалманы. Икмәк-тоҙлоҡ та эш хаҡы түләнмәгәс, эшселәр таралып бөттө. Берәүҙең дә иҫе китмәне. Хәҙер демократия, понимаешь! Эшләһәң, эшлә, эшләмәһәң, түбәгә төкөрөп тик ят! Гөрләп эшләп торған лесхоздан барлы-юҡлы мөлкәте менән контораһы ла буш һарайҙары ғына ҡалды. Уларға ла иркен "юл" астылар: әйҙә, үҙ эшегеҙҙе асығыҙ, нимә теләйһегеҙ, шуның менән булышығыҙ, ер, урман иркен, бөтәһе үҙ ҡулығыҙҙа, эшләгеҙ, табығыҙ, байығыҙ, тыйыуҙар юҡ! Оялмай ҙа һаман шул бер балыҡ башын сәйнәгән хужалар ҡылғандарына бер ниндәй яуаплылыҡ тоймай иркен, йылы конторҙарҙағы үҙ урындарында ултыра бирҙеләр. Насармы ни? Уларға һәйбәт! Хөкүмәттең кеҫәһе ҡалын, Аллаға шөкөр!

**(Дауамы бар).**

*✓ ...вазифа - рух бейеклеге түгел, бүкән бейеклеге, унда сосораҡ булған теләгән бер кеше үрләй ала, әгәр ҙә уға әҙәп, баҫалҡылыҡ, итәғәтлек, әхлаҡ тигән сифаттар ҡамасауламай икән.*

*КИТАБЕННАС*

**Яңы йыл алдынан ғына Зәйнәб Бейешева исемендәге "Китап" нәшриәтендә арабыҙҙан бик иртә киткән билдәле шағир, драматург, журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре Вил Ғүмәровтың (Кәбир Ғүмәр) шиғри һәм проза әҫәрҙәре, әҙәби-мәҙәни күҙәтеүҙәре, журналист сәхифәләре, уның хаҡында замандаштарының иҫтәлектәре тупланған "Яуа зәңгәр ҡарҙар..." тигән китап (төҙөүсеһе - Әмир Әминев) донъя күрҙе. Китапта шулай уҡ шағирҙың бер ҡайҙа ла баҫылмаған шиғырҙары урын алған. Беҙ Вил Ғүмәровты 80-се йылдарҙа республика матбуғатында милли сәйәсәт, экология, иҡтисад, интеллигенция тураһында үткер-үткер сығыштар яһаусы тынғыһыҙ шәхес итеп беләбеҙ. Вил ҡайһы бер мәҡәләләрен, бер ниндәй матбуғат баҫмаһында баҫтыра алмағас: "Минең өҫтәл тартмаһынан яҙмалар", - тип атап машинкала баҫылған даналарын Өфөләге башҡорт интеллигенция вәкилдәре араһында үҙе лә тараҡылап йөрөнө. Ул мәҡәләләр был китапта тулыһынса урын алған. Түбәндә һеҙҙең иғтибарға шуларҙан кәлимә-кәлимә фекерҙәр һәм әҙиптең бер нисә шиғырын тәҡдим итәбеҙ. Әлбиттә, ул фекерҙәр бынан өс тиҫтә йыл алда әйтелгән, әммә уларҙың күбеһе бөгөн дә актуаль яңғырай.**



# КҮҘҘӘРЕҢ МИҢӘ ТӨБӘЛГӘН,

## Йөрәгең - ҡайһы яҡҡа?

### Бюрократия хаҡында

... Тик файҙаланмаған мөмкинлектәрҙе, бушҡа киткән ваҡытты нимә менән алмаштырырға? Күҙәтеүебеҙсә, беҙгә демократик йәмғиәт шарттарына күсеү бик ҡатмарлы бара. Иң аптыратҡаны: ни өсөн беҙ үҙебеҙгә бирелгән хоҡуҡтарҙы йүнләп файҙалана алмайбыҙ? Ни өсөн бюрократтарҙы, волокита оҫталарын халыҡ алдында фашларға тартынабыҙ? Шуға ла улар башбаштаҡлығынан баш тартырға йыйынмай түгелме? Ә тәнҡит уты уларға оло саҙаҡа булыр ине...

...бюрократтар әле еңелмәне, улар яңы шарттарға ҡулайлашып өлгөрҙө. Өс йыл элгәре, әлбиттә, ул һоро көтөүгә рәхәт булған, сөнки уларҙың вазифаһы "тыйыусы" йә "шаҡыусы" булыуҙан ғына торған. Хәҙер иһә "тыйыусы" йә "шаҡыусы" булыр өсөн демагогияның казуистика нигеҙҙәрен үтергә, төрлө урындан цитаталар йолҡҡолап, уларҙы үҙенә ҡулайлаштырыу оҫталығын үҙләштереү мотлаҡ, юғарыға шаҡығанда ла шикәйәтнамәлә ниндәйҙер булһа ла фразеологик нигеҙ талап ителә. Тимәк, бюрократтарҙың иң һәләтлеләре генә тороп ҡаласаҡ, эйеме? Ләкин һәләтле бюрократ әллә ҡурҡыныс түгелме?

...вазифа - рух бейеклеге түгел, бүкән бейеклеге, унда сосораҡ булған теләгән бер кеше үрләй ала, әгәр ҙә уға әҙәп, баҫалҡылыҡ, итәғәтлек, әхлаҡ тигән сифаттар ҡамасауламай икән. Юғары бүкән - юғары инде, кеше баштарын тапап үрләһәң дә була. Маҡсаттың шундай эсте ҡыҙҙырыусы булыуы ялағай, мәкерле бәндәләрҙе бөтә төрлө сараларҙы файҙаланыуҙан да өркөтмәгән...

...идеология, мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт өлкәһендә эшләгән бюрократты ҡойроғонан тотоу ҡыйын. Әгәр ҙә завод план үтәмәй, ул етештергән йыһаздар сауҙала үтмәй икән - етәксене алмаштырыу бер нәмә лә түгел. Ә нисек мәҙәниәт, мәғрифәт, сәнғәт өлкәһендә етештерелгән рухи продукцияны контролдә тоторға? Отчеттарға ҡараһаң: бөтәһе лә ал да гөл - шунсама китап сыҡты, шунса спектакль ҡуйылды, концерт ойошторолдо, уҡытыусы әҙерләнде. Ә нисек итеп халыҡтың рухи тормошоноң сифатын билдәләргә? Ҡағыҙҙарҙа бөтәһе лә һәйбәт, тик ғәмәлдә башҡорт интеллигенцияһы кризис упҡыны ярында тороп ҡалды. Был һәләкәтте беҙ көндән-көн нығыраҡ тоябыҙ. Халыҡ үҙ интеллигенцияһын хәҙер йылдан-йыл аҙыраҡ ихтирам итә, шуға күрә лә йәштәр араһында интеллигент һөнәренең ҡәҙере төштө...

...Башҡортостанда иһә бюрократ күҙгә ташланып бармай, хатта ул кешелекле, кеселекле булып та күренә ала. Бөгөн уның тәкәбберлеге лә бик күҙгә салынмай, ҡара "Волга"ға ла ул тартынып ҡына инә. Ләкин уның тактикаһы әүәлгесә: йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултырта. Халыҡ яҙмышы, уның көндәлек мәнфәғәттәре лә бюрократтың теленән төшмәй...

...күптәребеҙ бөгөн дә тик үҙ намыҫтары алдында ғына саф булып ҡыланып, ҡыуаҡ төбөндә боҫоп ултыра. Ә берәй ауаныраҡы башын ҡалҡытһа, ул "ғәҙел" иптәш, йә нисек бының үңәсен бөрөрҙәр икән, тип, башын һоноп, ҡыҙыҡ күреп, тамаша ҡылырға тотона. Шуға күрә бөгөн дә бюрократ бик үк тартынып бармай, үҙенең ҡара эшен ҡылыуын дауам итә...

### Азатлыҡ хаҡында

...Нимә генә хаҡында һүҙ ҡуҙғатһаң да, бөтә нәмә бойондороҡһоҙлоҡҡа, үҙаллылыҡҡа барып тоташа. Сәйер осраҡ, халыҡ бер үк ваҡытта иреккә сарсаған, шул уҡ мәлдә ул азатлыҡ һәм хөрриәт шарттарында йәшәп күнекмәгән, үҙаллылыҡ менән файҙалана белмәй...

...Беҙҙе, бөтәбеҙҙе лә нисек кенә булһа ла бергә уҡмаштырып торған коммунистик идеология тарҡалғас, күп кеше рухи һәм шәхси азатлыҡҡа тарыны һәм ана шул иректе бик ауыр кисерә. Бер уйлаһаң, аптыраҡ бит, йәштәр араһында обком, райком һүҙен ишетмәгән, белмәгән быуын үҫеп килә. Ләкин ҡыуанырғамы быға, әллә иртәрәкме, сөнки күп кенә аҡыл эйәләре:"Азатлыҡ ул - бик ауыр хеҙмәт!"- тип әйтеп килгән. Шуныһы ҡыҙыҡ, үзбәксә хеҙмәт һүҙе михнәт тип яңғырай, тимәк, ирек - ул бик ауыр михнәт...

### Дин хаҡында

...Былтыр Ташкентта университет ятағында Ришат тигән Ҡаҙан егете: "Кәбир абый, сез диндармы?", - тигән һорау бирҙе. Ахыры, уйлап ултырғас:"Юҡтыр, сөнки һине генә диндармын тип алдап булыр ҙа ул, тик Аллаһы Тәғәләне алдап булмай шул", - тинем. Беҙҙә иман башҡасараҡ, унда Ислам йоғонтоһо өлөшләтә генә, шулай ҙа мосолманлыҡ бөтөнләй хас түгел беҙгә, тигәне лә оло ялған...

### Интеллигенция хаҡында

...интеллигент, беренсенән, халҡына хеҙмәт итергә, икенсенән, намыҫы ҡушҡанса ғына йәшәргә тейеш булһа, "яңы интеллигенттың" төрө, беренсенән, административ системаға ярарға, йәғни үҙенең түрәләренең ялсыһы булырға, ә икенсенән инде, үҙ нәфсеһе өсөн янырға, үҙ донъяһы өсөн үртәлергә тейеш була. Әүәл интеллигент рух бейеклеге, хеҙмәт өсөн фиҙаҡәрлек, халҡың йөкмәткән бурысҡа тоғролоҡ һымаҡ юғары сифаттарға лайыҡ булыуҙы аңлатһа, аҙаҡ бюрократтарҙың ниәте буйынса интеллект, аң, ярһыу йөрәктең бәҫен төшөрөп, интеллигентты ни бары эш хаҡы ала торған вазифаға, "йылы урын" биләүсе хеҙмәткәргә әйләндереү башлана...

...һуңғы йылдарҙа Өфөләге мосолман зыяратында урын ҡалманы. Затондағы дөйөм ҡәберлек бер ситтә ята, урыны ла һаҙлыҡлы. Ә бит Чесноковка янындараҡ борон Башҡортостандың бөтә ырыуҙарының йыйыны үткән ер бар. Бәлки, шул тирәлә яңы зыярат ойошторорға кәрәктер. Күренекле әҙиптәр, артистар, дәүләт эшмәкәрҙәре, сәнғәт әһелдәре, һуғыш ҡаһармандары, ил ағалары үлгәндән һуң да лайыҡлы урында ятырға тейеш...

### Әҙәбиәт "генералы" хаҡында

...Бынан теүәл ике йыл элек Белорет-Учалы тракты буйлап бесән сабып йөрөйөм. Автотурист исемен йөрөткән вәхшиҙәрҙең тапандыһынан ҡалған, салғы эләгерлек һәр урынды ҡырам. Бейеклеге бер аялай ғына булһа ла - тығыҙ ялан клеверы. Туҡта, сеү, бер таныш нәмәкәй күгәреп ята түгелме? Эйе шул, теткеләнгән, йыртҡыланған "Ағиҙел" журналы бит - милли интеллигенциябыҙҙың күҙ терәп торған берҙән-бер баҫмаһы. Журналды алып, ҡайын төбөнә ыңғайланым, ә унда бик мәртәбәле ағай-эненең әҫәрҙәренә генә татый торған олпат, тантаналы шрифт менән баҫылған тәнҡит мәҡәләһе. Тәнҡитселәр "полковнигы" әҙәбиәтебеҙ "генералы"ның һуңғы әҫәрен ғәзиз еребеҙҙең өҫтә балҡыған төпһөҙ күгенә аҫҡарып баһалай. Тәнҡиттең әҙе саҡ-саҡ ҡына төҫмөрләнә, ҡалғаны тоташ йүкә шына ла һаламға һалпы..."

### Торғонлоҡ хаҡында

"...бөгөн беҙ күп нәмәне "торғонлоҡ касафатына" япһарып, рәхәткә сыҡтыҡ. Имеш тә мимеш - беҙгә юл бирмәнеләр! Бында тос хәҡиҡәт бар, әлбиттә, ләкин ошо һылтау менән үҙебеҙҙең һәлкәүлек, булдыҡһыҙлыҡты аҡлап маташабыҙ түгелме һуң?"

### Тиҫтерҙәре хаҡында

"...башҡорт әҙәбиәте тарихынан төшөп тигәндәй ҡалған тотош быуындың, йәғни утыҙ менән ҡырҡ йәштәр араһындағыларҙың ижади һәләкәте - ул тәүҙә үҙебеҙҙең бәхетһеҙлегебеҙ, үҙ ҡазабыҙ. Шуға күрә быуынға ҡарата иң ҡаты хөкөм ҡарарын да үҙебеҙ билдәләргә тейеш. Шулай, күптәрҙең яҙмышы ни буй булманы, ни арҡыры. Эйе, минең тиҫтерҙәр үҙ ниәттәренә өлгәшә алманы, милли мәҙәниәттәренең уларға бағлаған нурлы өмөттәрен дә күрә алманылар.

Сәбәптәр? Ихтыяр йомшаҡлығы, тамыры ҡорой алмаған артыҡ идеализм. Беҙҙең быуын мәктәпкә төшкән саҡта Ватаныбыҙ күгендә партияның XX съезы тыуҙырған демократия ҡояшы ҡалҡа башлағайны. Эйе, ана шул ирекле ҡояш аҫтында Рәми Ғарипов, Фәрит Исәнғолов, Ким Әхмәтйәнов, Вафа Әхмәҙиев, Әнүр Вахитов, Миәссәр Басыров, Рәис Низамовтарҙың ижады бөрөләнеп ҡалды. Ләкин уларҙың ижад үҫентеләре лә оҙаҡ сәскә атманы, тиҙ арала демократияның яғымлы ҡояшын торғонлоҡтоң һоро болото ҡаплап, улар ваҡытынан алда үҙ осорҙарының ҡайғылы мартиролог исемлеген тулыландырҙы, ә аҙаҡ килгән, оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған буш йылдарҙа иһә йәнә бюрократ башын ҡалҡытты һәм уның боҙло ҡарашы ҡайҙа төбәлмәһен, шунда ҡара ҡырау төштө. Ана шул йән өшөткәс шарттарҙа Рәми, Фәрит, Вафа, Ким, Әнүр ағайҙарҙың ҡайнар йөрәктәре илгә йәм, әҙәмгә сәм биреп торҙо..."

### Рәми Ғарипов хаҡында

"...нәҡ Рәми ағайҙың дөрләгән йөрәгенең уты беҙҙең өсөн дә ижадҡа юл яҡтыртты. Ижадта ниндәйҙер бер мөғжизә менән аҙ булһа ла нығынып ҡалыуыбыҙға ла Рәми ағайҙың талапсан иғтибары сәбәпсе булды... Рәми Ғариповтың изге һабаҡтары булмаһа, беҙҙең әҙәби быуындың яҙмышы бөтөнләй өмөтһөҙ, үтә лә аянысла булыр ине. Былай беҙ, исмаһам, бер ни ҡәҙәр үҙ шәхестәребеҙҙе һаҡлап алып ҡалдыҡ... Рәми Ғариповтың яҡты көндәрен ҡыҫҡартыуҙа ғәйеплеләр һаман да арабыҙҙа йөрөй бит әле! Етмәһә, нисек йөрөйҙәр!.."

**ҠЫШ БАБАЙ БҮЛӘГЕ**

Осто ҡоштар, етте ҡыштар,
Туңып ҡатты йылғалар.
Бәҫләнеп торған ҡалаға
Килеп сыҡты ҡыҙ бала.

Ҡоштар хәҙер йылы яҡта,
Беҙҙән хәтәр йыраҡта.
Күҙҙәрең миңә төбәлгән,
Йөрәгең - ҡайһы яҡҡа?

Бүлмәлә ҡыҙ бала йырлай,
Зыңлап ҡуя быяла.
Йырлап ала, көлөп ала,
Йә, оялып, тыйыла.

Ҡыш бабай сыҡҡас урмандан,
Балҡып туҡтай бурандар.
Яңы йылда иҫке хистәр
Һис үҙгәрмәй ҡалғандар.

**КҮҢЕЛ МОҢДАРЫ**

Мең тауыштар бергә яңғырай,
Мең тауыштан донъя шаңғыра.
Мең кешенән бер мин һаңғырау,
Мең хәбәрҙән башым ҡаңғыра.

Ишетәмен елдең йырҙарын,
Аҡ бурандың шашып көләүен.
Ҡышҡы юлдың аһын, зарҙарын,
Күк ҡайындың яҙҙы теләүен.

Ишетәмен үткән үҙәккә
Көмөш ҡыңғырауҙар моңдарын.
Улар үргән серле биҙәккә
Һырлы юлдар сиккән сындарын.

Һәр бер ҡарҙы өндәр урата,
Һәр бер тамсы моңға ҡағыла.
Һәр бер ағас көйөн тарата,
Һәр бер көнгә һағыш тағыла.

Тыуған ерҙән микән килгәне,
Күк тауҙарҙы барып урағас,
Мең йыраҡты үтеп елгәне,
Тупрағымдан сәләм һорағас.

Күпме ерҙе гиҙеп үтһәң дә,
Һиңә ғәзиз башҡа ер булмаҫ.
Хәтеренде иҙеп бөтһәң дә,
Ялған күңеленә ҡот ҡунмаҫ.

* * *

Был төндө лә бергә ҡаршылайбыҙ...
Арыҡ ҡулың тарта пәрҙәне.
Мейес уты баҙлай, ҡараңғыла
Түбәнәйә бара әрҙәнә.
Бергә утын быстыҡ үткән көҙҙә,
Оҙон ҡышҡа сәфәр йыйындыҡ.
Йылы бөрккән өлкән аҡ мейескә
Ике яҡтан бергә һыйындыҡ.
-Утын етер микән яҙға тиклем,
Өшөмәйсә генә ҡышлаһаҡ?
-Өшөрбөҙ беҙ, йәнем, һөйөклөм -
Өмөттәрҙе үртәй башлаһаҡ...
Мейес ауыҙында күмер һүнә -
Йылы бөркөп төнгө бүлмәгә.
Наҙланып та, иркәм, ҡосаҡлайһың -
Башҡа ҡайғыларҙы белмәгәс...

* * *

Ҡарһылыуым -
Ҡар һыуыһың...
Ҡыштың һуңғы ярһыуыһың,
Яңғыраған шарлауығым,
Һыҡтап ирей ҡар һыуығы,
Ҡайнай тауҙың тарлауығы.
Ятһындыңмы,
Ҡарһылыуым?..

*✓ Бындай ерҙә һалынған йорт бәхетле ғаилә усағына әүереләсәк, уға ел-дауыл да, йәшенле ямғыр ҙа, башҡаһы ла ҡурҡыныс түгел, улар йортто урап үтәсәк.*

*ФАРАЗДАР*

# МАҠСАТ ҠУЯ БЕЛҺӘҢ...

## уңыш ҡойроғон эләктереп була

**Яңы 2010 йылдан һәйбәт тәьҫораттар алыр өсөн 11 ғинуар - Венераның Ҡояш менән тап килешеү көнөндә берәй матур байрам өсөн сәбәп табығыҙ. Әле генә Яңы йыл каникулдары, оҙон ял көндәре булып үтте, тиһегеҙме? Ул саҡта, һис юғында, хеҙмәттәштәрегеҙҙе үҙегеҙ бешергән тәм-том менән һыйлағыҙ. Ошо шартты үтәһәгеҙ, әлеге планеталарҙың сираттағы тап килеү көндәре - октябрь аҙағы һәм ноябрь баштарында һеҙ ҡыуанpark ваҡиға кисерерһегеҙ: йә эш хаҡығыҙ артыр, йә яҡын кешегеҙҙән ҡиммәтле бүләк алырһығыҙ.**

**Февраль башында** йондоҙнамәләге иң "бай" планеталар - Юпитер менән Плутон тап килешер. Был осорҙа ваҡ-төйәккә аҡса сарыф итмәгеҙ. Иң яҡшыһы - банкка юлланығыҙ һәм иҫәп асығыҙ. Ул үҙегеҙ ҙә көтмәгәнсә даимилыҡ менән тулыланып ҡына барасаҡ. 6 һәм 7 февралдә ҡулығыҙға ҙурыраҡ аҡсалар тотоп, уларҙы ҡат-ҡат иҫәпләгеҙ, матур һүҙҙәр әйтегеҙ - төшөм килер. Был осорҙа бурыс ҡайтарыу, милек бәхәстәрен хәл итеү өсөн уңайлы мәл.

Үҙенә ҡарата айырыуса иғтибарлы булыуҙы талап иткән тағы бер көн - **17 февраль.** Был осорҙа милек менән эштәрегеҙ уң килер, йәшәү урынығыҙҙы яңыртырһығыҙ, күптән хыял иткән алыҫ сәфәргә юлға сығырһығыҙ. Ләкин шундай шарт менән: был ғәмәлдәрҙе ғаиләгеҙҙән айырым түгел, ә бергә башҡарырға тейешһегеҙ.

**Апрелдең урталарында** Венера менән Юпитерҙың сираттағы ярашыу мәле, был осорҙа ҡыҫҡа ваҡытлы булһа ла отпуск алып, ял итеү файҙалы.

**Апрелдең икенсе яртыһы** ер участкаһы һатып алыу өсөн уңайлы килә. Бындай ерҙә һалынған йорт бәхетле ғаилә усағына әүереләсәк, уға ел-дауыл да, йәшенле ямғыр ҙа, башҡаһы ла ҡурҡыныс түгел, улар йортто урап үтәсәк. Шулай уҡ ошо мәлдә алтын-көмөш йәки ҡиммәтле таштарҙан биҙәүестәр, ҡиммәтле тиренән тун һатып алыу уңышлы булмаҡсы.

**Июндең икенсе яртыһында** ерҙә мөхәббәт хакимлыҡ итәсәк. Уның нурҙарынан ситтә тороп ҡалмайым, тиһәгеҙ, ижад донъяһына сумығыҙ, яратҡан эшегеҙгә бирелегеҙ. Кемдәр әле яңғыҙ, концерттарға, театрға йөрөгөҙ - үҙегеҙҙең икенсе яртығыҙҙы шунда осратыу ихтималы ҙур.

**07.00 "Салям"**
**09.00 Мультфильм**
**09.50 "Золотое сердце". С. Сурина. Спектакль Башкирского Государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**11.00 Фильм-детям**
**12.30 "Галерея изящных искусств". Союзу художников РБ - 75 лет**
**13.10 Фильм-сказка**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Между небом и землей". Музыкальный фильм**
**17.15 "Падали звезды сверкая..." Р.Арсланов**
**18.00 "Йома"**
**18.25 "Народные мелодии"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Мирас приглашает друзей..."**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.40 "Уфимское "Времечко"**
**23.10 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 9 ЯНВАРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Братья по крови"
07.30 "Играй, гармонь, любимая!"
08.00 Дисней клуб: "Чип и Дейл спешат на помощь", "Черный плащ"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Смак"
10.50 "Моя родословная"
11.40 "Ералаш"
12.10 "Живой мир. Тигр - шпион в джунглях"
13.10 "Ледниковый период". Полнометражный мультипликационный фильм
14.30 "Народная марка" в Кремле
16.10 "Хроники Нарнии". Приключения
18.40 "Ледниковый период". Спортивно-развлекательное шоу
21.00 "Время"
21.20 "Желание" Мелодрама
23.20 "Юбилейный вечер Сергея Мазаева". Концерт
00.50 "Гамбит"
02.30 "Великий Уолдл Пеппер"
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ
05.20 "Мы с вами где-то встречались". Комедия
07.10 "Вся Россия"
06.55 "Сельский час"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00, 14.00 "Вести"
08.10, 11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Год без Санты". Комедия
11.20 "Комната смеха"
12.20 "Ворожея". Лирическая комедия
16.45 "Новая волна-2009"
18.40 "Крем". Мелодраматический сериал
22.10 "Ночь закрытых дверей". Комедия
00.10 "Любовь по правилам и без". Романтическая комедия.
02.35 "Зубастики-3" "Черная" комедия
04.00 "Летчики". Драма

### НТВ
06.20 "Автобус". Приключенческий сериал
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.15 "Золотой ключ". Лотерея
08.45 "Гроза муравьев" Мультфильм
10.20 "Главная дорога"
11.00 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Солдат Иван Бровкин"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Брачный контракт". Детективный сериал
19.25 "Русские сенсации"
21.10 "Не родись красивым". Комедия
23.10 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво...". "Самооборона для женщин". "Тени прошлого". "Эти непредсказуемые мужчины!"
01.50 "Дочь моего Босса". Комедия
03.30 "Смит". Остросюжетный сериал
04.55 "Класс"

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.50 Погода**
**08.55 "Золотая коллекция сказок"**
**10.10 Мультфильм**
**10.20 "Волшебный курай"**
**10.55 Худ. фильм**
**12.45, 16.10 "Дарю песню"**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Новогодний звон Сулпылар"**
**15.45 "Позитив"**
**17.25 "Автограф". М. Каримов**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 "Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев". Трансляция из Нижнего Новгорода**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкирскому академическому - 90 лет"**
**23.00 "На сон грядущий"**
**23.40 "Чемпионат России по волейболу среди мужских команд Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Локомотив-Изумруд" (Екатеринбург) По окончании: погода**

## 10 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
04.50, 06.10 "Робин Гуд"
06.00 Новости
06.40 "Портрет жены художника"
08.00 "Армейский магазин"
08.30 Дисней клуб: "Кряк-бригада", "Клуб Микки Мауса"
09.20 "Здоровье"
10.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.00 Новости
12.10 "Валентина Теличкина. "Дышится хорошо, живется по-разному"
13.10 "Кадриль". Комедия
14.40 "Петербургские сновидения Георгия Тараторкина"
15.40 "Золотой век Сан-Ремо"
16.30 "Невероятные приключения итальянцев". Комедия
18.20 "Хроники Нарнии: принц Каспиан". Приключения
21.00 Воскресное "Время"
21.20 "Большая разница"
22.20 "Южное Бутово"
23.10 "Нокдаун". Драма
01.40 "Мы страха". Триллер
03.20 "Акула"
04.10 "Детективы"

### РОССИЯ
05.40 "Где находится Нофелет?"
07.15 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.45 "Сам себе режиссер"
08.30 "Утренняя почта"
09.05 "Это мы не проходили". Мелодрама
11.00, 14.00, 20.00 "Вести"
11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Сто к одному"
13.20 "Большой праздничный концерт"
15.40 "Не отрекаются любя". Мелодрама
19.00 "Крем". 19-я - 22-я серии. Мелодрамма
23.05 "Тихие сосны". Детектив
00.55 "Последний Самурай". Приключения
03.35 "Зубастики-4

### НТВ
06.20 "Автобус". Приключенческий сериал
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 Мультфильмы
09.25 QUATTRORUOTE
10.20 "Найти и обезвредить". Детектив
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Иван Бровкин на целине". Комедия
15.05 "Своя игра"
16.20 "Брачный контракт". Детективный сериал
19.25 "Оппергруппа". Детективный сериал
23.10 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво...". "В постели со звездой". Комедийный сериал
02.10 "Жизнь взаймы". Мелодрама
04.25 "Смит". Остросюжетный сериал

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Для вас, ветераны!"**
**08.55 Погода**
**09.00 "Золотая коллекция сказок"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Байтус"**
**11.50 "Мультфильм"**
**12.00 "Гала-концерт Республиканского телевизионного конкурса исполнителей башкирского танца"**
**15.00 "Дарю песню"**
**16.35 "Салям"**
**16.55 "Открытое первенство России по хоккею. Высшая лига. Зона "Центр". "Центр". "Торос" (Нефтекамск) - "Прогресс" (Глазов")**
**19.30 "Новое кино"**
**19.55 "Дарю песню"**
**21.10 "Лото 6 из 40"**
**21.30 "Мгновения жизни-2009". События года"**
**22.40 Погода**
**22.45 "Вечер. сом"**
**23.40 Художественный фильм. По окончании: погода**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 ғинуарҙа** 12.00 сәғәттә балалар өсөн Г.Х.Андерсендың "Үҙ йөрәгеңде тыңла" әкиәте.

**4 ғинуарҙа** М.Ғиләжевтың "Һөйәм, һағынам..." комедияһы.

**5 ғинуарҙа** 13.00 сәғәттә З.Биишева әҫәре буйынса "Серле көршәк" хикәйәте.

**5 ғинуарҙа** Т.Миңнуллиндың "Мулла" драматик хикәйәһе.

**6 ғинуарҙа** Ә.Атнабаевтың "Балаҡайҙарым" драмаһы.

**7 ғинуарҙа** "Ҡоҙаса" музыкаль комедияһы (Б.Бикбай, З.Исмәғилев).

**8 ғинуарҙа** Н.Ғәйетбаевтың "Аты барҙың - дәрте бар" комедияһы.

**9 ғинуарҙа** К.Кизиның "Кәкүк ояһы" психологик триллеры.

## Поправка
**к информационному сообщению КП РБ Редакция журнала “Аманат”**

В информационном сообщении, опубликованном в №52 от 26.12.2009г. слова **“Начальная цена продажи - 72 500 (девяносто две тысячи) рублей, в том числе НДС”** читать: **“Начальная цена продажи - 72 500 (семьдесят две тысячи пятьсот) рублей, в том числе НДС”**.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК...

## Иң мөһим талап шул

**Өфө ҡалаһы округы хакимиәте үткәргән "Вьюговей - 2010" яңы йыл фестивале 15 ғинуарға тиклем дауам итә. Ул Яңы йыл байрамы ваҡытында ойошторолған сағыу мәҙәни тамашаларҙың кимәлен күтәреү, халыҡ уйындарын, йолаларын һаҡлау, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтарына күңел асыу өсөн шарттар тыуҙырыу маҡсатында үткәрелә.**

Был фестиваль сиктәрендә Өфө ҡала округы райондары араһындағы ҡала конкурсы асыҡ майҙандарҙа уҙғарылған "Яңы йыл мәҙәктәре" театрлаштырылған байрам программалары конкурсы, "Боҙ ҡаласығы", "Әкиәти боҙ" тип аталған ҡар-боҙ скульптуралары конкурсы, "Ҡыш бабай - 2010" Ҡыш бабайҙар парады номинациялары буйынса үтә. Йола буйынса, байрам саралары декабрҙә үк башланғайны.

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, район хакимиәттәре башлыҡтары ла һәр райондың үҙәк майҙандарында урынлашҡан боҙ ҡаласыҡтары буйлап йөрөп сыҡты. Байрамдар мәлендә кескәйҙәрҙең генә түгел, ололарҙың да яратҡан урынына әйләнгән боҙ ҡаласыҡтары быйыл да матур итеп биҙәлгән, унда төрлө әкиәт геройҙары һәм, әлбиттә, яңы йыл хужаһы - юлбарыҫ һыны төп урынды алып тора. Район хакимиәттәре башлыҡтары әйтеүенсә, боҙҙан яһалған скульптуралар һәм тауҙар, иң мөһиме, хәүефһеҙ булырға тейеш, шуға ла быйыл хәүефһеҙлек техникаһын күҙәтеүгә ҙур иғтибар бүленгән.

"Вьюговей - 2010" фестиваленә йомғаҡ мәктәптәрҙә ҡышҡы каникулдар тамамланғас яһаласаҡ һәм һәр номинация буйынса юғары балдар йыйған район еңеүсе тип табыласаҡ.





СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# БАЙРАМ ТАБЫНЫНАН ҺУҢ...

## әфлисун аша

**Йыл буйы һағынып көтөп алған Яңы йыл байрамы ла үтеп китте. Аш-һыуҙан һығылып торған байрам өҫтәлендә төрлөһөнән ауыҙ итә-итә, таңға тиклем ултырғандан һуң, һаман да үҙегеҙҙе насар тояһығыҙ, гел йоҡоғоҙ килеп кенә торамы? Бай байрам табынынан һуң, организм бар көстө ашҡаҙандағы аҙыҡты һеңдереүгә тотона, шуға ла башҡа нәмәгә һеҙҙең хәлегеҙ ҡалмай. Их, сама белмәй ташланған шул, тип үҙегеҙҙе әрләп ултырыуҙан файҙа юҡ, булмаһа, түбәндәге ябай кәңәштәрҙе ҡулланып ҡарағыҙ.**

Үҙеңде яҡшыраҡ тоя башлау өсөн иң тәүҙә организмды етерлек кимәлдә һыу менән тәьмин итеү мөһим. Көнөнә 2,5 литр һыу эсеү бер көнгә етерлек энергия бирер. Балалар өсөн был норманың дүрттән бер өлөшө йәки яртыһы ла етә. Был исемлеккә ҡайнар эсемлектәрҙе лә индерергә ярай, тик уларҙың составында кофеин булмаһын. Үлән сәйҙәре бигерәк файҙалы, бөтнөк, имбирь, аҡ сәскә сәйенә лимон да ҡушып ебәрегеҙ. Байрам ваҡытында алкоголле эсемлектәр менән мауыҡмағыҙ, юғиһә, йоҡоһоҙлоҡ һәм баш ауыртыуынан яфаланасаҡһығыҙ. Ҡара сәйҙе көнөнә ике шәшкенән артыҡ эсергә тырышмағыҙ, сөнки сәй эсеп алғандан һуң уянып киткән организм тиҙ генә эшкә һәләтлеген юғалта. Әгәр даими рәүештә арыу тояһығыҙ икән, эш араһында сәй эсеп алыуҙан тыйылып тороғоҙ, башта ҡыйын булһа ла, өйрәнгәс, үҙегеҙҙе яңынан тойғандай итеп хис итерһегеҙ.

Тәм-том да организм өсөн бик зыянлы. Шоколадты йәшелсә, ярма аҙыҡтарынан һуң ғына ашарға ярай, был осраҡта ул яҡшыраҡ үҙләштерелә. Бәлештәрҙе эре итеп тартылған ондан йәки һоло онтағынан бешерергә лә була. Бындай он йәки һоло онтағы составындағы матдәләр ҡанда шәкәрҙең ҡапыл күтәрелеүенән дә һаҡлай, энергия сығанағы ла булып тора.

Составында фруктоза булыу сәбәпле, емеш-еләктәрҙе лә юғары энергия сығанағы исемлегенә индерергә мөмкин. Уларҙан яңы һығылған һут организм өсөн файҙалы буласаҡ.

Йәшелсәләр аш һеңдереүгә булышлыҡ итеп кенә ҡалмай, уларҙың калорияһы ла түбән. Шуға ла бер-ике йәшелсәнән торған ябай салаттар ашауға күсегеҙ. Кәбеҫтә, шпинат, ҡуҙаҡлыларҙан бешерелгән аштар еңел дә үҙләштерелә, тәмле лә.

Аҙыҡ рационына мотлаҡ рәүештә һөт, йомортҡа һарыһы индерегеҙ, был организмды өҫтәмә энергия менән тәьмин итәсәк. Мейе яҡшы эшләһен өсөн составында фосфор булған аҙыҡтар: грек сәтләүеге, арахис, миндаль, чечевица, борсаҡ, балыҡ ҡулланырға тырышығыҙ.

Кәйефте күтәрергә һәм артыҡ килограмдарҙан ҡотолорға әфлисун ярҙам итәсәк. Ул кальций, калий, марганец, фосфор, тимер, баҡыр һәм цинкка, С, В1, А витаминдарына, фолий кислотаһына бай. Етмәһә, организмдан токсиндарҙы сығара, иммунитетты күтәрә, яман шеш барлыҡҡа килеү ҡурҡынысын түбәнәйтә. Уның ярҙамында ябығырға теләүселәргә ябай кәңәш: аҙнаһына бер тапҡыр иртәнге, төшкө һәм киске ашҡа әфлисундар ғына ҡулланығыҙ. Әфлисунда калория аҙ һәм ул асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫа ала. Витаминлы коктейль яһарға ла була. Бының өсөн 2 әфлисун, банан, 100 грамм көртмәле (туңдырылған йәки ҡайнатма булһа ла ярай), ярты стакан һөт алығыҙ һәм миксер менән болғатығыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Берүк оҙайлы ялдарҙы өйҙә, телевизор алдында үткәрә күрмәгеҙ. Ҡышын организмға былай ҙа витаминдар һәм ҡояш нуры етешмәй. Насар кәйеф, күңел төшөнкөлөгө, йоҡо туймау, аппетит күтәрелеү, шулай уҡ муйын, арҡа, баш ауыртыуы шуның менән бәйле. Көн яҡтыһы ҡыҫҡа булыу сәбәпле, баш мейеһе эмоцияларға һәм организмдың биологик ритмдарына йоғонто яһаусы мелатонин гормонын етерлек кимәлдә етештереп өлгөрмәй. Балаларығыҙ менән тышта уйнап инегеҙ, саңғыла йөрөгөҙ. Сәләмәт булығыҙ!**

ЙЫЛ УҢЫШЫ

# ТЕРЕ ҺЫУ ҮҘЕБЕҘҘӘ

**25-27 ноябрҙә Мәскәүҙә халыҡ-ара дегустациялау конкурсы үтте. Унда бөтәһе 200-ҙән ашыу һыу етештереүсе ҡатнашты һәм Башҡортостандан берҙән-бер "Таймаҫ" эсәр һыуы ғына бөтә күрһәткестәр буйынса "тере һыу" тип табылды һәм өсөнсө урын яулап ҡайтты.**

Хәҙер ашаған аҙығыбыҙҙың сифаты ныҡ төштө. Колбаса ашайбыҙ - ите юҡ, һыу эсәбеҙ - тәме юҡ. Бөтә һыуҙар ҙа бер үк технология менән эшләнә. Скважина менән алынған һыуҙы механик рәүештә таҙарталар, шунан "ОСМА" таҙартыу ҡоролмаһы системаһына бирәләр. Әгәр һыу тәбиғи яҡтан таҙа, саф булһа, уның аша 5-10 процент ҡына үтә, ә сифатһыҙ икән, 100 процент үтә һәм ҡыуып таҙартылған һыу килеп сыға. Бындай һыуҙы өс айҙан артыҡ эсергә ярамай, ул кеше һаулығы өсөн зыянлы, сөнки ул үле һыу иҫәпләнә. Европа илдәрендә бындай дистиллирланған һыуҙы иң ярлы ҡатламға һаталар, хатта бушлай бирәләр. Ә беҙҙә, киреһенсә, күпселек халыҡ тап ошондай таҙартыу аша үткән һыуҙы ҡуллана, сөнки уның үле булыуын һәм кеше һаулығына зыянлы булыуын аңлап етмәй. Көйөргәҙеләге "Таймаҫ" һыуы составында фенол бөтөнләй юҡ һәм бындай таҙартыуға мохтаж түгел, шуға күрә лә тәбиғи тәме һаҡлана. Һыу етештереү менән икенсе йыл ғына шөғөлләнеүебеҙгә ҡарамаҫтан, бындай уңышҡа өлгәшеүебеҙ беҙҙең өсөн ҙур ҡыуаныс булды. Быны ватандаштарыбыҙ ҙа баһалар һәм үҙ сәләмәтлеген хәстәрләп, тәбиғи һыу эсеүҙе хуп күрер, тигән өмөттәбеҙ. Беҙ үҙ еребеҙҙә етештерелгән, организмыбыҙ өйрәнгән сифатлы ризыҡ ашарға һәм саф һыу эсергә тейешбеҙ.

**Сәғит ИСМӘҒИЛЕВ.**

# ИКЕ ЕҢЕҮ МЕНӘН...

## көйәрмәндәрҙе шатландырҙылар

**"Салауат Юлаев" Яңы йыл алдынан ике уйын үткәрҙе. Тәүҙә Мәскәү өлкәһенең "Атлант" командаһын 4:2, унан һуң Омск өлкәһенең "Авангард" хоккейсыларын 4:1 иҫәбе менән ҡыйратты.**

"Атлант" командаһы менән осрашыу барышында ҡунаҡтар уйын барышын үҙ файҙаһына борорға тырышып, тупаҫ ҡыланды, хатта һуғыша башланылар. Эрик Ландриҙың тупаҫ ҡыланыуына Андрей Таратухин лайыҡлы яуап бирҙе.

"Авангард" менән көс һынашыу тағы ла көсөргәнешлерәк булды. Бында бары тик икенсе осорҙоң ун етенсе минутында ғына Вадим Козлов ҡунаҡтар ҡапҡаһына тәүге шайбаны сәпәй алды. Өсөнсө осорҙа майҙан хужалары уйын тиҙлеген һиҙелерлек арттырҙы. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне. Тәүҙә Андрей Кутейкин иҫәпте икегә еткерҙе. Унан һуң Андрей Таратухин һәм Игорь Григоренко өсөнсө һәм дүртенсе шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына индерҙе. "Авангард" хоккейсылары ни бары бер шайба менән генә яуап бирә алды. Яңы йылға ике бүләк бына шулай яуланды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

*СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ*

# ЭСТРАДА КҮГЕНДӘ...

## "гәлсәрҙәр"ҙең үҙ балҡышы бар

**"Гәлсәр һандуғас" телевизион эстрада йыр конкурс-фестивале телепроект булараҡ 2001 йылда тәүге тапҡыр эфирға сыға, ә уның тәүге Гала-концерты Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә үтә һәм БСТ каналынан Яңы йыл төнөндә күрһәтелә һәм шунан алып ул традицияға әүерелә.**

Ә 2004 йылда "Гәлсәр һандуғас" продюсер үҙәге булараҡ эш башлай һәм эстрада күгенә йыл һайын яңы асыштар, яңы исемдәр, таныш тауыштар алып сыға. Тап шуға үҙенең биш йәшлек юбилейы уңайынан быйыл да "гәлсәрҙәр" Яңы йыл алдынан үҙенең ятраҡан тамашасыларына ҙур концерт бүләк итте. Был юлы ошо йылдар эсендә лауреат исеменә лайыҡ булып, тамашасы һөйөүен яулаған популяр башҡарыусылар ҡатнашты. Гәлсәрҙәрҙең сәхнәлә лә, ижадта ла тырыш һәм егәрле булыуҙары мәғлүм. Улар әле тегендә, әле бында гастролдәрҙә йөрөй, яңы йырҙар ижад итә, клиптар төшөрә - дөйөм алғанда, бөтә яҡлап өлгөрөргә, ижадын байытырға, төрләндерергә, камиллаштырырға ынтыла. Әлеге юбилей концертында ла улар яңы йырҙары менән үҙҙәрен яңыса балҡытыуға өлгәште.

Был конкурстың тағы ла бер үҙенсәлеге дуэттар сығышы булғандыр. Элек "гәлсәрҙәр" билдәле йырсылар менән дуэт башҡарһа, был юлы үҙҙәре ретро йырҙарҙан бына тигән гөлләмә әҙерләп, уларға яңыса һулыш өрөүе менән тамашасы күңелен арбаны. Шулай уҡ күптән түгел Туймазыла үткән "Оҙон көй" йыр бәйгеһендә беренсе урын алған Юнир Һағынбаевтың башҡорт халыҡ йыры "Томан" менән сығыш яһауы, конкурстың мәртәбәһен арттырҙы. Халыҡ уның йырын яратып ҡабул итте.

**Был фестиваль хаҡында уй-фекерҙәрен белер өсөн "Гәлсәр һандуғас" сығарған йырсыларҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт иттек. Бына ни ти улар был телепроект хаҡында:**

**Гөлфинә ХӘМИТОВА, "Гәлсәр һандуғас" - 2008 телефестиваленең "Тамашасы һөйөүе"н яулаусы:**

- Күптәр моңо, һәләте булып та, мөмкинлеге булмауҙан йәки баҙнатсылығы етмәүҙән эстән генә моң һыҙып йөрөүен белә. Бына тап ошондай йәш тауыштарҙы табып, уларҙа ышаныс тыуҙырып, ҡанат ҡуйып, оло сәхнәгә алып сығып, уларҙың моңон халыҡҡа еткереүҙә "Гәлсәр һандуғас" фестиваленең баһаһы әйтеп биргеһеҙ ҙур. Мине лә, ябай уҡытыусы булараҡ, ҙур сәхнәгә, йыр-моң даирәләренә алып сығыуы менән тормошомда ҡырҡа боролош яһап, уны яҡшы яҡҡа үҙгәртте, индәремә ҡанат ҡуйҙы, үҙемә ҡарата ышаныс үҫтерҙе. Был конкурс беҙҙә йырсы һәләтен генә асып ҡалмай, үҙебеҙҙе сәхнәлә, кеше араһында тоторға, актерлыҡ һәләттәрен асырға ла булышлыҡ итә. Әлеге ваҡытта төп эшемдә лә, яңы һөнәремдә лә бергә алып барырға тырышам. Беҙ бында бер ғаилә кеүекбеҙ. Кәрәк саҡта бер-беребеҙҙе тәнҡитләп, хаталарҙы төҙәтеп ебәрәбеҙ, уңыштарыбыҙҙы бергә уртаҡлашабыҙ.

**Марсель ҠОТОЕВ, "Гәлсәр һандуғас" - 2004 телефестиваленең "Йыл асышы":**

- "Гәлсәр һандуғас" фестивалендә ҡатнашыу мине эстрада сәнғәтендә киң офоҡтарға алып сыҡты ла, халыҡҡа танытты ла инде, тип иҫәпләйем. Тәү башлап "Миләштәр", "Ауыл



ҡапҡаһы" йырҙары аша тамашасы күңеленә асҡыс таптым, "Йыл асышы" номинацияһына лайыҡ булдым.

Эстраданың да бит төрлөһө була. Бар шау-шыуға ҡоролған еңел-елпе йырҙар, ә бына "Гәлсәр һандуғас" эстрада өлкәһендә үҙенсәлекле тауышлы башҡарыусылары һәм мәғәнәүи яҡтан күңелгә ятышлы йырҙары менән кимәле яғына күпкә юғары тора. Мин үҙем дә йыр һайлағанда уның мәғәнәһенә һәм көйөнә ныҡ иғтибар итәм, сөнки йыр кешене дәртләндереп кенә ҡалырға түгел, ә уны уйға һалырға ла, хыялға осорға ла, хискә сорнарға ла, рухландырырға ла, илатырға ла, йырлатырға ла тейештер, минеңсә.

Эстрадала популярлыҡ яулап була, әлбиттә, ә бына халыҡсанлыҡҡа өлгәшеү, тауыш мөмкинлектәреңде тағы ла үҫтереү өсөн был ғына етмәй. Уның өсөн, һис шикһеҙ, башҡорт халыҡ йырҙарына мөрәжәғәт итеү кәрәк. Эстрада менән халыҡ йырҙары индәремдәге ике ҡанат шикелле, икеһен дә бер тигеҙ алып барырға тырышам, ә шулай ҙа халҡымдың мәңгелек моңдары күңелгә яҡыныраҡ. Мин бала саҡтан халыҡ йырҙарын тыңлап, йырлап үҫтем һәм артабан да уны моң донъямдан сығарып ташларға йыйынмайым. Мин бөгөн эстрада йырҙарын да, опера арияларын да оҫта итеп башҡара алам икән, уның нигеҙендә мине рухландырып, күңелемде байытып, тауыш мөмкинлектәремде үҫтереп, камиллаштырып торған башҡорт халыҡ йырҙары ята. Популярлыҡ бер көнлөк, халыҡсанлыҡ мәңгелек икәнен мин бер ваҡытта ла иҫтән сығармайым һәм шуға ла яуланған үрҙәр менән генә туҡтап ҡалмайым, бөтә көсөмдө һәм һәләтемде һалып, йыр-моң даръяһында ҡолас ташлап алға ҡарай тулҡындар ярам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нимә генә тимә, эстрадаһыҙ бөгөнгө йыр сәнғәтен күҙ алдына килтереүе мөмкин түгел. Ана шул эстрада күгендә ҡайнашҡан әллә күпме башҡарыусы үҙенән "йондоҙ" яһарға тырышҡанда, "гәлсәрҙәр" үҙенә генә хас тауышы, йөкмәткеле йыры менән сағыуыраҡ балҡығандай тойола. Тап шуғалыр ҙа уларҙы бөгөн йәше лә, ҡарты ла берҙәй ятратып тыңлай, күңеленә ауаздаш моңдо, йырҙы таба.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

*ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!*

### Картуф менән дөгөнән диетик аҙыҡ

Дүрт-биш картуфты әрсемәйенсә бешереп алып, тышын һыҙырып, йоҡа ғына итеп турарға. Бер литр һыуҙа ике кишер, ике петрушка тамыры, бер башлы һуған бешереп алырға. 100 грамм дөгөгә ике ҡалаҡ үҫемлек майы, тоҙ һалып, утҡа ҡуйғас, баяғы кишер менән һуған бешкән һыуҙы өҫтөнә ҡойоп, йомшарғансы бешерергә. Кәстрүл төбөнә туралған картуфты түшәп, өҫтөнә йоҡа итеп туралған аҡ май киҫәктәре һалырға. Икенсе рәткә дөгө, унан май һалып, тағы ла картуф һәм уның өҫтөнә май яғырға. Ярты сәғәттәй мейестә бешереп алырға. Өҫтәлгә томат соусы менән бирергә.

### Әхирәтегеҙ сәйгә инһә...

Ҡабаҡты турап, ярты стакан һыу һалып быҡтырырға ла әҙер булыр алдынан туралған алма ҡушып ебәрергә. Был массаға шәкәр ҡомо, ике йомортҡа, сохари онтағы ҡушып болғатырға һәм майлы табаға һалып, эҫе мейестә ярты сәғәттәй бешереп алырға. Бының өсөн яртышар килограмм ҡабаҡ менән алма, ике йомортҡа, алты ҡалаҡ шәкәр ҡомо, ике стакан сохари онтағы йәки он кәрәк.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘХЕТҺЕҘҘӘР ГЕНӘ...

## үҙ-үҙе менән ғорурлана ала

Бөйөк эштәргә хеҙмәт иткән кеше уларҙы үҙенә лә хеҙмәт иттерә ала.

**(Томас Элиот).**

Тормошта бик аҙға өлгәшкәндәр... үҙен бар нәмәлә хаҡлы тип иҫәпләй.

**(Олдос Хаксли).**

Үс алыуҙың иң яҡшы юлы - һине рәнйеткән кешенең кимәленә төшмәү.

**(Марк Аврелий).**

Йәш саҡта бик юғары, әммә еңел генә яулап була тип иҫәпләнгән идеалдар ҡартая барған һайын йырағыраҡҡа күсә бара.

**(Генри Торо).**

Ғәҙәттә, кемдәр бәхетһеҙ, кемдәр... йоҡоһоҙлоҡтан интегә, шулар үҙе менән ғорурланырға ярата.

**(Бертран Рассел).**

Ҡасып ҡотолоу мөмкин булмаған нәмәне... кисерергә өйрәнергә кәрәк.

**(Мишель де Монтень).**

Теләһә ниндәй маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ҡыҫҡа һәм оҙон юл бар.

**(Зигмунд Фрейд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Аяҡ кейемдәре етештереү буйынса бер фирма үҙ продукцияһын Һиндостанға экспортҡа ебәрергә ҡарар итә. Ихтыяжды өйрәнеү өсөн фирма иң яҡшы ике экспертын был илдең төрлө провинцияларына ебәрә. Улар буласаҡ баҙар мөмкинлектәрен өйрәнеп, беренсел мәғлүмәт йыйырға тейеш була. Бер нисә көндән Һиндостандағы баҙарҙы өйрәнеп йөрөүсе эксперттарҙың береһе фирма етәкселегенә шундай отчет ебәрә:"Әфәнделәр, проектты япһағыҙ ҙа була, был илдә аяҡ кейеме киймәйҙәр".**

**Коллегаһының ниндәй отчет ебәреүе тураһында бер ни ҙә белмәгән икенсе эксперт фирма етәкселәренә шундай отчет ебәрә: "Әфәнделәр, был илгә ебәрә торған экспортты өс тапҡырға арттырығыҙ, бында әле берәү ҙә аяҡ кейеме киймәй". Бына шуның кеүек, бер үк хәл кем өсөндөр еңеп сыға алмаҫлыҡ кәртә, икенсе берәү өсөн фантастик мөмкинлек булып тойола. Пессимист:"Ел олой", - тип йөҙөн сира, оптимист:"Ел йырлай", - тип һоҡлана..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 5579